✓ ***Мөхтәрәм йәмәғәт! Кемдәр йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, сентябрҙең 17-һенә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитте киләһе айҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ. 31 августа 2012 йылдың беренсе яртыһы өсөн быйылғы хаҡтар менән (50665 индекслыһына 340 һум 92 тин, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) 370 һум 92 тин) яҙылыу тамамлана. Сентябрҙән хаҡтар бер аҙ үҙгәрәсәк: 50665 индекслыһы - 348 һум 24 тин, 50673 индекслыһы 378 һум 24 тин торасаҡ.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27 АВГУСТ - 2 СЕНТЯБРЬ (УРАҒАЙ - ҺАРЫСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№35 (453)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Юҡтың аты юҡ...**

йәки Булған нәмәндә юҡ тимә



3

**Башҡорт яугирҙары тураһында...**

ситтәр белә, беҙҙә белмәйҙәр



6-7

**Картатайҙарҙың матур өлгөһөндә...**





8-9 ейәндәрҙе тәрбиәләйбеҙ

**Күҙҙәренде харамдан һаҡла,**

йәғни ҡыҙ-ҡатындар ҡылығы тураһында



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эшҡыуарлыҡ һәр кем ҡулынан килерлек шөғөлмө? Ғөмумән, эшҡыуарлыҡҡа тотонорға бөгөн нимә ҡамасаулай?

***Гөлфинә ЮЛАМАНОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының "Бизнес-үҙәк" етәксеһе урынбаҫары:*** Беренсенән, башланғыс капитал булмауы, икенсенән, урындарҙа ҡуртымға алып, эш башларҙай биналар юҡлығы эште тотҡарлай. Шулай ҙа, тәү сиратта, бөтә ҡамасаулаған нәмә - кешенең үҙендә, унын ҡурҡыуында, тәүәккәллек итмәүендә, тип әйтер инем. Үҙ эшен асырға теләп, беҙҙең үҙәккә мәғлүмәти ярҙам һорап килеүселәр бихисап. Килгән саҡта барыһының да күҙҙәре янып тора, тауҙар аҡтарырлыҡ көсө бар кеүек, ләкин артабан дәрт-дарманы теләктән ары китә алмай. Эште башлаған хәлдә лә, ярты юлда туҡтап ҡалалар. Ундайҙарҙың үҙ-үҙе алдында ла, башлаған эше алдында ла яуаплылыҡ тойғоһо юҡ икәне асыҡ инде. Шулай уҡ күптәр аныҡ ҡына ниндәй йүнәлештә эш башларға теләгәнен дә белмәй, бер ай бер төрлө эш менән була ла, күпмелер ваҡыттан һуң бөтөнләй икенсе йүнәлеште һайлай. Шулай оҙон-оҙаҡ уйлап йөрөгәнсе, барлы-юҡлы финанс ресурстары ла бөтә, уй-хыялдары ла йәйлап һүрелә.

Тағы ла шуны билдәләп үтергә кәрәк: беҙҙең халыҡҡа ҡыйыулыҡ, үҙ-үҙенә ышаныс етмәй. Мәҫәлән, эшҡыуарлыҡта бөгөн күп йүнәлештәр, уларҙы атҡарып сығыу өсөн күп алымдар бар. "Бизнес-үҙәк"кә килеүселәргә улар хаҡында һөйләй башлаһаң: "Ә минең ҡулдан килерме, эшләй алырмынмы икән?" - тип икеләнеү белдерә һалалар. Шулай уҡ күптәр эшенең һөҙөмтәһен тиҙ генә күрергә теләй. Эшҡыуарлыҡта төп сифат - алдан күрә белеү, эшенден һөҙөмтәһе бернисә йылдан ниндәй буласағын күҙаллау. Мәҫәлән, эшҡыуарлыҡҡа батырсылыҡ иткән кеше төҙөп килтергән бизнес-планында әле ҡулында булған продукцияны һатыуҙан ниндәй килем алырын ғына һанап сығара, ә унан алған килемде артабан нисек тотоноуын, эшҡыуарлығын үҫтереү өсөн аҡсаһын ҡайҙа һәм ниндәй күләмдә, нисек бүләсәге хаҡында уйлап та ҡарамай. Шулай итеп, унын бизнес-планы артабан үҫеүгә түгел, ә бар эшен зарарлы һәм файҙаһыҙ итеүгә ҡоролған булып сыға. Был, әлбиттә, эшҡыуарҙарҙың ғына ғәйебе түгел, ә урындағы етәкселектең, шул тармаҡта эш итеүсе белгестәрҙең ошо өлкәлә һай йөҙөүендә лә. Көн дә тиерлек сығып торған төрлө программа, ҡарар, акттар аныҡ файҙа килтерһен өсөн уларҙың халыҡҡа аныҡ һәм аңлайышлы итеп еткерелеүе лә шарт. Шул саҡта ғына беҙ уларҙан ниндәйҙер һөҙөмтә аласаҡбыҙ.

***Мөхәммәт МЫРҘАБУЛАТОВ, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты:*** Иң ныҡ ҡамасаулаусы кәртә - ошо өлкәгә ҡағылған ҡәтғи закондарҙың, хоҡуҡи акттарҙың булмауы. Ә закон булмаған ерҙә тәртип тә юҡ. Шуға күрә бөгөн күптәр эшҡыуарлыҡҡа тотонорға теләп тә, ярты юлда туҡтап ҡала, эш уй-хыялдан ары китмәй, сөнки һәр эштең ҡануниәт менән нығытылған булыуы ғына башҡараһы эшенден уң булыуына ниндәйҙер ышаныс бирергә мөмкин. Тағы ла быға тиклем аныҡ дәүләт сәйәсәтенең һәм дәүләт йүнәлешенең булмауы ла эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә кәртә булып торҙо. Бөгөн был тармаҡҡа иғтибар бермә-бер артты, халыҡ та ҡуҙғала башланы, буғай. Ләкин электән килгән эшҡыуарлыҡты тормошобоҙҙоң насар элементы итеп күрһәтеү ҡалыбы тулыһынса аңдан юйылмай тороп, был тармаҡтың ныҡлап үҫеүе күҙәтелмәйәсәк.

***Илдар СӨЛӘЙМӘНОВ, программист:*** Беҙҙең илдә "ябай" эшҡыуар булыу, минеңсә, файҙаһыҙ эш. Яҡшы бизнес эшләйем тиһәң, тәү сиратта, чиновник булып ултырыу мөһим. Дәүләт хеҙмәтендәге кешегә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә ярамай, тигән закон бөгөн эшләмәй һәм үҙен хөрмәт иткән һәр түрә ниндәй ҙә булһа бизнесҡа эйә. Әлбиттә, бизнес унын исеменә теркәлмәй. Бының өсөн ҡатын, балалар бар. Ҡайһы саҡта был эш өсөн төпкөл ауылда йәшәгән туғанды ла "ҡулланырға" була, ә унын үҙенең ҙур табыш килтергән фирма "етәксеһе" икәнлеген дә белмәйенсә, тинен тингә ялғап ғүмер кисереүе бер кемде лә борсомай. Чиновник эшҡыуарға конкурент булырлыҡ "ябай" эшҡыуар шундай ҡыҫым аҫтына алынырға мөмкин, сыҙап ҡына тор! Бар ғүмеренде бөтә ерҙә үҙ кешеләре ултырған чиновник менән көрәшеп үткәрәһеңме, әллә тулы тормош менән йәшәүгә бағышлайһыңмы? Бик һирәктәр генә беренсе яуапта туҡталыр. Шуға күрә, үҙен бик тә эшҡыуар итеп танытырға теләүсе кеше, алдан әйтеүемсә, йә власҡа эйә булырға, йә үтә лә аҡсалы кеше булырға тейеш. Һуш китерлек шәп фекер "хужаһы" булыуың ғына уңышлы эшҡыуар булып китеүенде тәьмин итмәй әле.

***Радик Исламбаев, аспирант, эшҡыуар:*** Эшҡыуарлыҡҡа тотонорға бер кем дә, бер нәмә лә ҡамасауламай. Был бары тормошонда нимәнелер үҙгәртергә ҡурҡҡан, оҙаҡ уйларға яратҡан, бер ниндәй тәүәккәллекте ҡабул итмәгән, "мөмкин түгел" тигән һүҙҙәр ҡоршауы артына йәшеренеп йәшәргә күнеккән кешеләрҙең йәшәйеш позицияһы ғына. "Мөмкин түгел"дең - факт түгел, ә бары тик фекер генә икәнлеген инҡар итеүгә ҡарағанда, уға баш эйеп йәшәү еңелерәк. Шул уҡ ваҡытта эшҡыуар башҡаларҙан айырылып торған фекерләү ҡеүәһенә эйә булырға тейеш. Ул кешелә йә була, йә булмай, шуға күрә дәүләт ниндәй генә ярҙам күрһәтмәһен һәм программалар төҙөмәһен, кешелә эшҡыуарлыҡ осҡоно юҡ икән, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Ниндәйҙер сәбәптәр уйлап сығарып, дивандан торорға ялҡауланып ятҡан кешегә әҙер бизнесты алып килеп бирһәң дә, ул уны бер ай эсендә юҡҡа сығарасаҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!



Гәзитебеҙҙе ректорҙар ҙа, Рәшиҙә Искәндәр ҡыҙы ла уҡый...

✓ *Беҙ, өлкәндәр, йәштәргә юл бирергә, уларға ниндәйҙер бурыстарҙы ышанып тапшырырға ашығып бармайбыҙ шул. Уларҙың аңлау тапмағандан ҡыҙып китеүен, тупаҫыраҡ һүҙ ҡатыуын кире ҡабул итәбеҙ.*



ИШАРА

**Ишеткәнһегеҙҙер инде, Рәсәйҙә, шулай уҡ беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа ла декабрҙә буласаҡ РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙа "Берҙәм Рәсәй" партияһынан күрһәтеләсәк кандидаттарҙы алдан һайлау сараһы үтте. Праймериз тигән сит ил һүҙе менән аталды ул. Республиканың 17 майҙансығында, йәғни район-ҡалаларында үткәрелгән был сарала "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһынан һәм Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтына ингән йәмәғәт ойошмаларынан һайлап алынған 6301 вәкил исемлектәге 123 кандидат өсөн тауыш бирҙе. Кандидаттар исемлегенә өс кеше - мин, йәғни Гөлфиә Янбаева, Хәләф Ишморатов, Иршат Аҫылғужин Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан тәҡдим ителгәйнек. Праймериз тураһындағы фекерҙәрем менән журналист булараҡ бер аҙ ғына уртаҡлашып үткем килә.**

# КАНДИДАТТАР ТӨҪМӨРЛӘНДЕ,

## улар яҙмышы декабрҙә хәл ителә

Праймериз - үҙенең асылы менән яҡшы күренеш, әлбиттә, һайлауҙарҙан алда унда ҡатнашырға тейешле лайыҡлы кандидаттарҙы билдәләү, төҫмөрләү ул. Был осрашыуҙар, ысынлап та, кандидаттарҙың тәжрибә уртаҡлашыу, донъяуи һәм сәйәси хәлдәргә баһа биреү, үҙ фекерен еткереү майҙанына әйләнде. Праймериздарҙа күренеүенсә, хатта ҡайһы берәүҙәрҙең сәхнәлә, халыҡ алдында телмәр тотҡаны ла булмаған - улар ҙа тәүге сирҡаныс алды. Ә инде бер кандидат - Өфөнөң 42-се дөйөм белем биреү мәктәбенән химия уҡытыусыһы Лиза Ҡыяметдин ҡыҙы Әғәҙуллинаның мәғариф өлкәһендәге генә түгел, ә йәмғиәтебеҙҙәге тәрбиә, әхлаҡ мәсьәләләре тураһында һөйләгәндәре ҡатнашыусыларҙың һәр береһен тулҡынландырмай ҡалманы һәм башҡа кандидаттар өсөн йөкмәткеле телмәр тотоу өлгөһөнә әйләнде.

Осрашыуҙарға килгән вәкилдәр ҙә Президентҡа, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесенә, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫарына, әлеге Дәүләт Думаһы депутаттарына, башҡа вазифалы кешеләргә, фән докторҙарына, банкирҙарға үҙ һорауҙарын биреү мөмкинлегенә эйә ине. Ошо мөмкинлектән аҙҙар ғына файҙаланыуы бер аҙ аптыратты мине: һаман иртәгә ни булырына битарафбыҙ, ил, республика яҙмышын, үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулдарыбыҙға алып үҙгәртеп булырына ышанып етмәйбеҙ. Беҙҙең бындай битарафлыҡ менән файҙаланғандар ҙа бар бит...

Алдан һайлау ни өсөн кәрәк булды һуң? Был һорауға сараның аҙаҡҡы майҙансығында - Өфөнөң Киров районында үткән осрашыуҙа Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов яуап бирҙе:"Һуңғы йылдарҙа депутатлыҡҡа кандидаттар исемлеге партияларҙың үҙенең эсендә генә төҙөлдө һәм дәғүәселәр араһында көрәш тигән нәмә лә юҡҡа сыҡҡайны. Был, әлбиттә, йәмғиәтебеҙҙә төрлө һайлауҙарға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙарҙы кәметте. Ә был праймериз тип аталған яңы процедура кандидаттар араһында көрәш, ярыш сәме уятты. Унан һуң, Дәүләт Думаһында республика мәнфәғәтен яҡларлыҡ әүҙем кешеләр даирәһен киңәйтеү зарурлығы ла бар ине..."

Берәү ҙә инҡар итмәҫ: маҡсаты изге был сара әле камиллыҡтан барыбер алыҫ тора. Уны ысын асылында ғәмәлгә ашырыу өсөн байтаҡ ваҡыт үтер әле. Уның өсөн һайлаусылар - яуаплылыҡҡа, һайланыусылар халыҡ фекеренән ҡурҡмаҫҡа, һайлаусы һәм һайланыусы үҙ-ара намыҫлы, ихлас мөнәсәбәт ҡорорға өйрәнергә тейеш. Ул сараның алдау, күҙ буяу ҡоралына әйләндерелеүе лә бар. Бына әле лә сара тураһында төрлө һүҙ ҡуйыртыуҙар, тауыштар дөрөҫ иҫәпләнмәй, тигән хәбәрҙәр йөрөнө. Улар ҙа нигеҙһеҙ тыумағандыр. Мин үҙем дә, мәҫәлән, Баймаҡ, Әбйәлил, Бөрйән районлары вәкилдәрен йыйған Сибайҙағы осрашыуҙан шундайыраҡ шик менән ҡайттым. Сөнки шул төбәктә тыуып-үҫкән, исеме республикаға билдәле кандидаттар ҙа, шулай уҡ журналист булып эшләгән осорҙа был райондарҙа үҙ кеше булып бөткән мин дә таныштар, дуҫтар, милләттәштәр йыйылған йыйылышта бик аҙ ғына тауыш йыйған булып сыҡтыҡ. Шул уҡ ваҡытта ошо төбәк халҡы ишетеп тә белмәгән, беренсе тапҡыр ғына күреп торған ҡайһы бер кандидаттар беҙгә ҡарағанда биш тапҡыр күберәк тауыш йыя! Шунан һуң баяғы шик нығына ла ҡуя инде...



Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан ошо сарала ҡатнашыусылар исемлегенә индерелгәс, был сәйәси ваҡиғаны журналист булараҡ эстән күҙәтеү мөмкинлегенә алыу ҡыҙыҡтырҙы мине. Ысынлап та, үҙемә күп һабаҡ алдым, күп һығымталар яһаным. Әле килеп беҙҙәге сәйәсәт нисек "әүәләнә" икәнен аңланым. Ул сәйәсәтте тейешле кимәлдә тотоп тороусыларға нисек ауыр икәнен дә күрҙем... Ә шулай ҙа журналист өсөн барыһынан бигерәк яңы таныштар менән осрашыу ҡиммәт. Үҙем битараф түгел кеше булараҡ, битараф булмағандар менән аралашыуҙан оло ҡәнәғәтлек тойғоһо алдым. Бары тик битараф булмағандар ғына ошондай оло сәйәси майҙанда үҙ тауышын ишеттерергә батырсылыҡ итә бит. Тик уларҙың ысынлап та лайыҡлыларының тейешле тауыш йыя алмауы ғына йәл. Мәҫәлән, арабыҙҙа Илдар Сөйөшев тигән илһөйәр, ҡыйыу, Башҡортостаныбыҙ яҙмышы өсөн янған йәш кеше булды. Яңғыҙы ғына ла республиканы күкрәге менән ҡаплап яҡларҙай егет. Йәл, ул тәүгеләр исемлегендә түгел. Беҙ, өлкәндәр, йәштәргә юл бирергә, уларға ниндәйҙер бурыстарҙы ышанып тапшырырға ашығып бармайбыҙ шул. Уларҙың аңлау тапмағандан ҡыҙып китеүен, тупаҫыраҡ һүҙ ҡатыуын кире ҡабул итәбеҙ, уларҙы ғәйепләргә әҙер торабыҙ. Йәштәренә юл бирмәгән йәмғиәт ниндәй була инде ул? Андрей Таназлы исемле бер йәш кандидат әйтеүенсә, йәштәре Мәскәүгә, башҡа ҡалаларға күңеленә ятҡан эш йә сәйәси амбицияларын тормошҡа ашырыу майҙансыҡтары эҙләп киткән төбәктең киләсәге бармы? Ошондай һорауҙар әле лә борсой мине һәм борсоуын дауам итәсәк, сөнки декабрҙә беҙ тауыш бирәсәк кандидаттар исемлегенә йәштәр эләкмәне...

Тағы ла... Осрашыуҙар мәлендә кандидаттар исемлегенә ингән ситтәрҙең - мәскәүҙәрҙең күплегенә ризаһыҙлыҡ белдереп сығыш яһаусылар ҙа байтаҡ булды. Был аңлашыла ла: республикала тыуып үҫмәгәндәр республика мәнфәғәтен йөрәгенә яҡын алырмы ла, уны яҡлап күтәрелеп сығырмы? Мине бигерәк тә ҡурҡытҡаны шул: Дәүләт Думаһындағы теге милли республикаларҙы юҡҡа сығарырға тип лаф орған депутаттар был мәсьәләне тағы ла көслөрәк тауыш менән күтәреп сыҡһа, ошо "сит бауырҙар" беҙҙе күкрәге менән ҡаплармы, яҡлармы? Шикләндерә бит әле. Эйе, республика етәкселәренең был Мәскәү вәкилдәрен Дәүләт Думаһында ғына түгел, ә Үҙәктәге төрлө министрлыҡ, ведомстволар алдында Башҡортостан мәнфәғәтен яҡлай алырлыҡ лоббистар итеп күрергә теләүе аңлашыла. Әммә лоббистар ролен үҙебеҙҙең патриот егеттәр хатта яҡшыраҡ та башҡарыр ине, тигәнгә иманым камил. Шулай ҙа "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһынан депутатлыҡҡа кандидаттар исемлегенә өс Мәскәү кешеһе инмәксе. Һайланырға тейешле ун биш кешенең өсөһө ситтән булыуы күберәк түгелме икән?..

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дәүләт Думаһындағы әлеге депутаттарыбыҙ кем икәнен беләһегеҙме? Сәлиә Мырҙабаеваны беләбеҙ - һайлаусылары менән әүҙем осрашыуҙар үткәрҙе, ҡайһы бер дауаханаларҙы республика милкенә күсереү өсөн күп көс һалды. Марсель Йосоповты республикаға инвестициялар йәлеп итеүсе әүҙем депутат итеп таныйбыҙ. Андрей Назаров, Иршат Фәхретдинов, Морат Кейекбаевтарҙы республиканың элекке етәкселәренә ҡаршы әүҙем көрәшеүсе итеп беләбеҙ. Ә башҡаларҙың исемдәре лә онотолған. Депутат Павел Крашенинников, республиканан барған депутаттар өс төркөмгә бүленде, тип бер нисә урында ҡабатланы. Берҙәм командала эшләмәгәс, әлбиттә, депутаттарҙың көстәрен нимәгә сарыф иткәне аңлашыла. Киләһе саҡырылыш депутаттарында ла яңылышып ҡуймаһаҡ ярай ине, тим.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәтенең 23 августағы 297-се ҡарары менән Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә даими йәшәүсе һәм баланы (балаларҙы) уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусы граждандарға бер тапҡыр түләнә торған аҡсалата пособие тәғәйенләү һәм түләү тәртибе раҫланды. Пособие "Балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамының өҫтәмә саралары тураһында"ғы Федераль закондың 6-сы статьяһында ҡаралған әсәлек (ғаилә) капиталы күләмендә уллыҡҡа алынған һәр балаға түләнә. Тәрбиәгә алыусылар бер тапҡыр түләнә торған аҡсалата пособиены ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, уллыҡҡа алынған баланы дауалауға, уны шифахана-курорттарҙа һауыҡтырыуға һәм белем биреүгә тулыһынса йәки өлөшләтә тотона ала.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғо менән Ураҙа байрамын билдәләгән көн, 2011 йылдың 30 авгусы, ял һәм байрам көнө тип иғлан ителде.

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы консультация үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, 22 августа бөртөклөләр һәм ҡуҙаҡлылар республи-ка баҫыуҙарының 155 мең гектарында сабылған. Был дөйөм майҙандың 46 проценты. Шуның 704 мең гектарҙан ашыуы (43 процент) һуғылған. Тулайым йыйым бер миллион ярым тоннаға яҡын. Уртаса уңыш гектарынан 20,9 центнер тәшкил итә. Саҡмағошта күрһәткес 30,5 центнер булһа, Мәләүез һәм Өфө райондары баҫыуҙары уртаса 30-ар центнер уңыш бирә.

✓Аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләрҙең беренсе класҡа барасаҡ балаларын яңы уҡыу йылына әҙерләү өсөн Башҡортостан Хөкүмәте 9,4 миллион һум аҡса бүлде. Аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләрҙә үҫкән 6219 бала тәүге тапҡыр мәктәп тупһаһын аша атлап инәсәк. Уларға 1520 һумға бөтә мәктәп кәрәк-ярағы алынасаҡ. Күп балалы ғаиләләрҙән беренсе класҡа барасаҡ иң күп уҡыусы - 331 бала - Баймаҡ районында теркәлгән. Икенсе урын Өфө ҡалаһында - 322 бала. Әбйәлил районы беренсе класҡа барасаҡ бындай балалар иҫәбе буйынса өсөнсө урында - 302.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов мәшһүр балетмейстер, РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәйзи Әҙһәм улы Ғәскәровтың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, 2012 йылда республикала юбилей датаһына арналған саралар үткәреләсәк.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЮҠТЫҢ АТЫ ЮҠ...

## йәки Булған нәмәнде юҡ тимә



**Был әйтемдең ике төрлө, әммә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы мәғәнәүи йөкмәткеләрен төҫмөрләп була. Быны дәлилләр өсөн уларҙың һәр икеһенә лә айырым-айырым туҡталып үтәйек.**

Беренсеһе: юҡтың аты юҡ, йәғни "юҡ"тың (булмаған нәмәнең) хатта аты ла (исеме лә) юҡ мәғәнәһе. Ҡыҫҡаһы, донъяла булмаған нәмәнең исеме лә булмай. Был - аксиома. Ошо күҙлектән сығып, телебеҙҙәге ҡайһы бер һүҙҙәрҙең нисек барлыҡҡа килеүенә сәйәхәт яһайыҡ. Әйтәйек, тел ғалимдары әсәй һүҙенең иң боронғо формаһын инәй тип иҫбатлай. Ни өсөн инәй? Сөнки донъяға һәр кем "эң-ңә" тип илай-илай тыуа, был һүҙҙәрҙе әйтеп, сабый әсәһенән үҙен имеҙеүен һорай, йәғни кендек өҙөлгәндән һуң әсәһенә - икенсе туҡланыу сығанағына ошо һүҙҙәр менән ялғана. Һе, ҡыҙыҡ, улай булғас, африканлылар ҙа "эң-ңә", йәғни "инәй, имергә бир", тип тыуа микән?

Минеңсә, беҙҙең телдә ҡулланылған әсәй һүҙе лә шулай уҡ иң боронғо һүҙ булырға тейеш. "Әсәй" - "әм-әс (имсәк) имеҙеүсе", йә булмаһа ҡаты формаһындағы "асай" - "кешегә донъяны асыусы", йәғни тыуҙырыусы мәғәнәһе. Ошондай уҡ логика менән "атай" һүҙенең дә нисек барлыҡҡа килеүен тикшерәйек. Кешелектең иң боронғо, иң тәүге кәсебе һунарҙы күҙ уңында тотһаҡ, уҡ "атыусы", "атҡа" менеп йөрөүсе кеше шул атай булалыр ҙа инде.

Ат, тигәндән, элек урыҫтарҙың тормош-көнкүрешендә ат үҫтереү, ат тотоу йолаһы бөтөнләй булмаған. Уларға ат культын төрки ҡәүемдәр алып килә. Урыҫ армияһында кавалерияның барлыҡҡа килеүендә башҡорт аттары ла ҡатнаша. Батшаның башҡорттарҙан 30-50-әр мең баш ат йыйып алыуы ҡайһы бер ихтилалдар тоҡаныуына ла сәбәп булғанын тарихтан беләбеҙ. Һәр хәлдә, урыҫ телендәге "лощадь", "конь" һүҙҙәренең төрки телдәрҙәге "алаша ат", "ҡонан" һүҙҙәренә тамырҙаш булыуы юҡҡа ғына түгел.

Әйтемдең "булмаған нәмәнең исеме лә булмай" мәғәнәһе кешене ҡыҫыр хыялдарҙан , мәғәнәһеҙ ашҡыныуҙарҙан, нәфсеһен аҙҙырыуҙан һаҡлаусы иҫкәрмә лә булып тора. Шуға күрә, ҡайһы саҡ донъяла бар әйберҙе лә таба алмай алйыған кешене һыуындырыу өсөн "Бушҡа ыҙалама, юҡтың аты юҡ", тип әйтәләр.

1058-1111 йылдарҙа йәшәүсе танылған фарсы теологы һәм философы Әл-Ғаззали әйтеүенсә, ҡырҡҡанда ла ҡаны сыҡмаҫ бер һаран байҙы күршеһе ҡунаҡҡа саҡырып, йомортҡа тәбейәһе (яичница) менән һыйлаған. Ҡарун бай күп итеп был ризыҡ менән тығынған да, артынан тағы ла күберәк итеп һыу эскән. Бына бер мәл байҙың эсе күбеп, хәле насарайып китеп, үлем түшәгенә ятҡан. Янына килгән табиб: "Ашаған ризығыңды ауыҙыңдан кире сығар, ҡоҫ, шунан аяғыңа баҫырһың, һауығырһың", - тигән кәңәш биргән. "Мине алйотҡа һанайһыңмы әллә һин, затлыларҙан затлы ризыҡ - йомортҡа тәбейәһен ауыҙҙан сығарып, ниңә уны әрәм-шәрәм итергә. Үлһәм-үләм, әммә улай итмәйем", - тип ҡырҡа ҡаршы төшкән ҡарун бай.

Ризыҡты ғүмеренән артыҡ күргән һаран бай, шулай итеп, ҡорһағындағы ризығын кире сығарырға йәлләп, эсе күбеүҙән үлеп ҡалған. Уның ҡарауы, ҡарунлыҡ, нәфсе, мәскәйлек хаҡында нindәйен ғибрәт тороп ҡалған был ваҡиғанан.

1148-1220 йылдарҙа йәшәүсе икенсе бер фарсы шағиры Аттар, Фәрит-әд-дин Мөхәммәт бин Ибраһим ән-Нишабуриҙың булған һәм булмаған әйберҙәргә ҡарата әйтелгән фәһемле бер фекере беҙҙең "Юҡтың аты юҡ" әйтеменең бер варианты кеүек ҡабул ителә. "Һин бер нәмәне лә юғалтманың һәм ул әйберҙе эҙләмә. Һин "юҡ" тип әйткән әйберҙең исеме лә юҡ, шулай булғас, һинең был хаҡта бер нәмә лә әйтмәүең хәйерле. Ә бына һин нимә хаҡында беләһең һәм был хаҡта әйтәһең, ул нәмә һин үҙең ул. Ә үҙеңде ҡабат-ҡабат белеүҙең зыяны юҡ", - ти шағир Аттар. Шағирҙың был һүҙҙәренән беҙ "Юҡтың аты юҡ" әйтеменең тағы ла төпкәрәк һалынған мәғәнәһен аңлай алабыҙ. Был һүҙҙәрҙең асылы, бер уйлағанда, ябай ғына һымаҡ: үҙҙәре генә түгел, хатта исемдәре лә булмаған әйберҙәр, нәмәләр, төшөнсәләр хаҡында буш хыялға бирелеп, ғүмереңде заяға үткәргәнсе, үҙеңде өйрәнергә, үҙеңде белергә тырыш. Һәр бер табыш үҙ-үҙеңде табыуҙан, һәр еңеү үҙ-үҙеңде еңеүҙән башлана тигән һымаҡ килеп сыға бында. Ошо уңайҙан халҡыбыҙҙың "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел", "Бүтәгәнән дә түбән бул" тигән мәҡәл-әйтемдәрен дә иҫкә төшөрөп үтке килә.

"Юҡтың аты юҡ" әйтеменең икенсе мәғәнәһе, киреһенсә: "Юҡ"тың йәғни "юҡ", тип әйтеүсе кешенең хатта менеп йөрөрлөк аты ла булмай мәғәнәһендә. Ошо ерҙә өлкәндәрҙең бер ваҡытта ла "юҡ", тип әйтергә ярамағанлығын иҫкәртеүҙәре иҫкә төшә. Ысынлап та, һүҙҙең матдиләшеү күренешен иҫкә төшөргәндә, һәр ваҡыт "юҡ" тип әйтеүсе был һүҙе менән үҙендә булған нәмәһенән баш сөйөүе ихтимал. Хатта был һүҙҙең ымишара формаһын ғына алған саҡта ла нимәнелер "юҡ", тип белдереүсе эйәген-башын горизонталь рәүештә һелкеп аңлата һәм был хәрәкәте менән үҙенә юлды яба кеүек. Икенсе яҡтан ҡарағанда, булған нәмәнең дә үҙеңдә юҡлығын белдереү һарандарға хас ҡылыҡ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ИҢ ҘУР ӘХЛАҠҺЫҘЛЫҠ

Донъялағы иң ҙур әхлаҡһыҙлыҡ - эргәһендә тамағы йүнле ризыҡ күрмәгән миллионлап кешеләр барҙа кемдеңдер балда һәм майҙа йөҙөүе, байлығын елгә туҙҙырыуы. Алла Пугачеваны әйтәм. Бөтә Рәсәй генә түгел, бөтә донъя хайран уның талантына. Йондоҙ, тип табыналар. Әммә ошо йондоҙ казиноларҙағы ҡомарлы уйында бер төн эсендә миллионлап һум ғына түгел, миллионлап долларын ҡалдыра. Бына ҡайҙа ул әхлаҡһыҙлыҡ! Илдә күпме балалар, ғаиләләр асыға, хәйерселектә йәшәй. Ә халыҡтың йондоҙ тип табынған кешеһе үҙ нәфсеһен, үҙ танһығын ҡандырыр өсөн аҡсаһын шулай еңел генә уйынға һала. Үҙ аҡсаһы бит, тиһегеҙме? Ләкин шул аҡсаны ниндәйҙер мәрхәмәтлек өсөн һала алмаймы ни ул? Был бит йондоҙҙар өсөн яҙылмаған ҡанун. Яуаплылыҡ. Һәр хәлдә, сит ил йондоҙҙарының аҙым һайын ниндәйҙер мәрхәмәтлек акциялары ойоштороуы тураһында уҡып, ишетеп торабыҙ.

Ә беҙҙең йондоҙҙарҙың барыһы ла тиерлек нәфсе ҡандырырға, бер-береһен уҙҙырып, башҡаларҙың күҙен ҡыҙҙырып, шашынырға ярата. Йондоҙҙар тормошон яҡтыртырға яратҡан баҫмалар ошондай миҫалдар менән сыбарлана. Бына әле генә фигурист Плющенконың, шулай уҡ бар халыҡтың яратҡан боҙ йондоҙоноң, яңы өйләнгән кәләшенә әллә күпме миллионлыҡ муйынсаҡ алыуы тураһында яҙҙылар. Шунан, ниңә кәрәк инде ул миллиондарҙы муйынға аҫып йөрөү? Бер мең һумлыҡ алтын сылбырҙы муйынға тағырға оялдыра әле...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөгә физик мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн ойошторолған "Һәр кем йөрөй алырлыҡ транспорт мөхите һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге" I автоуҙышында ҡатнашыусылар килде. "Тигеҙ хоҡуҡтар - тигеҙ мөмкинлектәр" девизы менән уҙғарылған автоуҙыш 20 августа Мәскәүҙә башланып, 18 сентябрҙә Владивосток ҡалаһында, Тымыҡ океан буйында тамамланасаҡ. Сарала ҡатнашыусы 22 кеше Рәсәйҙең 15 төбәге аша барлығы 10 мең километр юл үтмәксе.

✓Нанотехнологиялар конгресы барышында Башҡорт дәүләт университетында һәм М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында түңәрәк ҡорҙар ойошторолдо. Республиканың юғары уҡыу йорттары ғалимдары нанотехнолo-гиялар үҫешенә лайыҡлы өлөш индерә, тип билдәләнде был сараларҙа. Әммә хеҙмәттәрҙең күбеһе лаборатор тикшеренеүҙән ары китә алмай. Әлеге сараларҙа төрлө өлкәләр буйынса нанотехнологиялар өлгөләре күрһәтелде, улар хаҡында фекер алышыу ойошторолдо.

✓Быйыл ете айҙа Башҡортостанда 309 кеше геморрагик биҙгәк инфекцияһын йоҡторған. Былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда күрһәткес 1,8 тапҡыр түбән. Ғәҙәттәгесә, бөйөр эшмәкәрлеген тотҡарлаусы алама сиргә 20 йәштән 50 йәшкә тиклемге кешеләр дусар булған (74 процент), шулай уҡ биҙгәкте 14 йәшкә тиклемге дүрт бала кисергән.

✓Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының балет труппаһы Европа буйынса турнеға әҙерләнә. Гастролдәр 8 ноябрҙән 2012 йылдың 2 ғинуарына тиклем барасаҡ. Башҡортостан артистары Германия, Финляндия, Италия, Чехия ҡалаларында сығыш яһаясаҡ. Яҡташтарыбыҙ сит ил сәхнәләрен яулаған осорҙа Өфө сәхнәһендә Италия һәм Испания театрҙары артистары сығыш яһаясаҡ.

✓Татарстандың Яр Саллы ҡалаһында "Айһылыу" балалар баҡсаһында 25 балаға иҫәпләнгән башҡорт төркөмө асылды. Төркөмдө тамамлаусылар Яр Саллылағы башҡорт мәктәбендә туған телдә уҡыуын дауам итә аласаҡ. Тантанала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты делегацияһы башҡорт төркөмө тәрбиәселәренә музыкаль үҙәк һәм "Китап" нәшриәтенең башҡортса китаптарын тапшырҙы. Әле Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институтында "Айһылыу" балалар баҡсаһының башҡорт төркөмө тәрбиәселәре өсөн курс ойоштороу мәсьәләһе хәл ителә.

✓ *Ағымдағы йылдың алты айында республика ЗАГС-тарында атайлыҡ хоҡуғын раҫлаусы 3863 акт теркәлгән. Был һан республикала рәсми теркәлмәгән никахта йәшәүселәрҙең күп булыуын күрһәтә.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Дим.** 30 августа Дағстан урамындағы яңы йорт ҡулланыуға тапшырыласаҡ.

**Калинин.** Бөгөн "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркында "Сәскәләр көнө" район байрамы сиктәрендә "Ҡурай тажында беҙ берҙәм!" тип аталған конкурс үтә. Ул туғыҙ номинация буйынса уҙғарыла. Сараның төп маҡсаты - халыҡта тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл ҡараш, тыуған илгә, уның тарихына, мәҙәниәтенә, гөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам тәрбиәләү һәм граждандарҙың ялын мәҙәни ойоштороу тора.

**Киров.** Иртәгә иртәнге сәғәт 11-ҙә Республика иппотерапия үҙәгендә инвалид балалар өсөн ҡала ғаилә байрамы үтәсәк.

**Ленин.** Ҡышҡы һыуыҡтарға әҙерлек эштәре дауам итә. Мостай Кәрим исемендәге урамдағы йылылыҡ трассаһы ремонтлауы сәбәпле, Революцион урамынан 41-се йортҡа тиклемге арауыҡта транспорт хәрәкәте туҡтатыла.

**Октябрь.** Баш ҡалала балалар баҡсаһы проблемаһы көнүҙәк булып ҡала. Был бигерәк тә Октябрь районына хас. Сөнки Сипайлово биҫтәһендә йәштәр күп. 1 сентябрҙә йәш ғаиләләрҙе һәм бәләкәстәрҙе оло шатлыҡ көтә - ике балалар баҡсаһы асыласаҡ. Шулай уҡ яңы уҡыу йылына район территорияһында тағы ла бер балалар баҡсаһы эш башлаясаҡ. Ә бөгөн Спорт һарайы алдында иртәнге туғыҙҙан киске дүрткә тиклем Иглин районы аграрийҙары ҡатнашлығында ауыл хужалығы йәрминкәһе гөрләй.

**Орджоникидзе.** 30 августа сәғәт 12-лә Иҫке Турбаҫлы ауылында Ураҙа байрамы айҡанлы байрам саралары ойоштороласаҡ. 9-11 сентябрҙә иһә Серго Орджоникидзе исемендәге майҙанда VIII махсуслаштырылған бал йәрминкәһе үҙенә саҡыра.

**Совет.** Бөгөн республика уҡытыусыларының традицион август кәңәшмәһе асылды. Унда ҡатнашыусылар баш ҡаланың иң яҡшы мәктәптәре, шул иҫәптән Совет районының 110-сы мәктәбенең эше менән дә таныштылар. 29 августа тиклем "Ышаныс" халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплекслы үҙәге" "Беренсе тапҡыр - беренсе синыфҡа" тип аталған акция үткәрә. Унда беренсе класҡа барыусыларға бүләктәр тапшырыла.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ИШЕКТӘРЕН АСТЫ БЫНА...

## көтөп алынған сауҙа йорто




**Тирә-яғыбыҙҙа ҙур магазиндарҙың бәләкәйҙәрен ҡыҫырыҡлап сығара барыуына өйрәндек тә инде, бугай. Төрлө супер- һәм гипермаркеттар тормошобоҙҙоң айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнде. 25 августа Өфөлә асылған IKEA магазины ла майҙан ҙурлығы һәм бай тауар ассортименты менән үҙенә һатып алыусыларҙы күпләп йәлеп итеренә шик юҡ. Сауҙа йортон асыу тантанаһында республика етәксеһе Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты.**

- IKEA компанияһы менән берлектә алып барылған эштең ҙур этабын тамамлап, күркәм сауҙа йортон асыу тантанаһы менән тәбрикләйем, - тине Рөстәм Зәки улы. - IKEA-ның, ысынлап та, гарантияланған сифат, арзан хаҡ һәм һәйбәт хеҙмәтләндереү икәнлеген миллионлаған кеше белә һәм Өфө халҡының да ошоно баһалау мөмкинлеге алыуына шатмын. Бындай магазин республиканың башҡа ҡалаларында ла асылыр тип ышанам.

Шулай уҡ тантаналы сарала IKEA-ның БДБ һәм Рәсәйҙәге генераль директоры Пер Вендшлаг, Швецияның Рәсәйҙәге ваҡытлыса вәкиле Мартин Оберг һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Павел Качкаев ҡатнашты.

- Башҡортостанда IKEA магазинын асыуыбыҙға шатбыҙ. Тәбәк өсөн был өҫтәмә эш урындары һәм тоторо҅ҡло һалымдарҙан тыш, тәү сиратта, өр-яңы йәшәү сифаты ла. Сөнки IKEA-ның миссияһы - өй өсөн сифатлы тауарҙарҙы арзан хаҡҡа тәҡдим итеп, күп кешенең көндәлек тормошон яҡшыға үҙгәртеү, - тине Пер Вендшлаг. Ул үҙенең сығышында Башҡортостанда инвестиция климатының һәйбәт булыуын, компания өсөн яңы эшлекле контакттар табыу һәм үҫтереү өҫтөнлөклө һәм стратегик йүнәлештәрҙең береһе булып тороуын, республика мебель етештереүселәренә компанияның эшлекле партнеры булып китеү мөмкинлеге биреләсәген билдәләне.

- Беҙҙең магазинда көндәлек тормошта кәрәк булған әйберҙәр урын алған. Һәр һатып алынған әйберҙең оҙаҡ һәм ышаныслы хеҙмәт итәсәгенә компания ныҡлы гарантия бирә, - тине Өфөләге IKEA магазины директоры Анна Солодовникова. - Магазин шулай уҡ һатып алыусыларға автомобилдәр ҡуйыу урыны, балалар майҙансығы, ҡапҡылап алыу өсөн кафе һәм ресторан хеҙмәтен дә тәҡдим итә.

60 йылдан ашыу үҙ дизайны буйынса мебель һәм йорт йыһаздары етештергән IKEA компаниялар төркөмөнә бөгөн төрлө илдәрҙә 200-ҙән ашыу магазин, Рәсәйҙә 12 комплекс ҡарай. Дөйөм эшселәр һаны 127 меңдән ашыу. Өфөлә иһә IKEA магазинының асылыуы 240 кешегә эш урыны бирҙе. Шулай уҡ ошо компанияға ингән "Мега" һәм "Ашан" гипермаркеттарының асылыуы Республика көнөнә билдәләнгән. Уларҙа тағы ла ике меңдән ашыу эш урыны булдырыласаҡ, тип вәғәҙә итә компания етәкселеге. Магазинға барып етеү өсөн махсус автобус маршруттары булдырылған. Черниковка биҫтәһенән ("Еңеү" туҡталышы) - Сипайлово (Жуков урамы) - "Мега" һәм "Спорт" туҡталышы - "Мега" араһында һары төҫтәге фирма автобустары йөрөйәсәк.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

### Бер мең тирәһе кеше исемен үҙгәрткән

Үҙ исемдәре менән риза булмағандар һаны арта. 2011 йылдың беренсе яртыһында республиканың 960 кешеһе исем үҙгәртеү мөмкинлеге менән файҙаланған. Улар күбеһенсә матур яңғырамаған исемдәренән "баш тарта", шулай уҡ тыуыу тураһындағы таныҡлыҡты тултырғанда ебәрелгән хаталарҙы төҙәтә. Былтыр ЗАГС-тарға ошондай һорау менән 628 кеше мөрәжәғәт иткән. Был хеҙмәт менән иң күп ҡулланыусылар Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй. Быйыл унда, былтырғы кеүек үк, 77 кеше үҙ исемен алыштырған.

### Дүрт мең атай "табылған"

Ағымдағы йылдың алты айында республика ЗАГС-тарында атайлыҡ хоҡуғын раҫлаусы 3863 акт теркәлгән. Был һан республикала рәсми теркәлмәгән никахта йәшәүселәрҙең күп булыуын күрһәтә. Беренсе яртыл йыллыҡта бөтәһе 26545 бала донъяға килгән. Өфөлә был күрһәткес былтырғы менән сағыштырғанда - 2,7, ә Стәрлетамаҡта 7,6 процентҡа кәмегән. Былтыр ошо ваҡыт арауығында 3969 кеше үҙенең атайлыҡ хоҡуғын теркәгән.

### Үҙ ғаиләһен "табыусылар" кәмей

Республикала 2011 йылдың беренсе яртыһында 210 бала уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа алынған. Былтыр иһә ғинуар-июнь айҙарында 224 бала үҙ ғаиләһен "тапҡан". Ҙур ҡалаларҙа һандар әллә ни үҙгәрмәгән. Өфөлә 70 (былтыр 75), Стәрлетамаҡта 10 (11) бала уллыҡҡа алынған.

### Малайҙар күберәк тыуа

Республиканың Граждандарлыҡ акттарын теркәү идаралығы етәксеһе Зифа Әбүбәкерова белдереүенсә, 2011 йылдың алты айында тыуыу тураһында 26847 таныҡлыҡ теркәлгән. Был һан, былтырғы менән сағыштырғанда 4,8 процентҡа йәки 1346 кешегә кәмерәк. Яңы тыуған сабыйҙарҙың 50 проценты ғаиләлә - беренсе, 35 проценты - икенсе, 10 проценты - өсөнсө, 3 проценты - дүртенсе һәм 2 проценты дүрттән күберәк балалар. Өфөлә тыуым һаны 0,4 процентҡа, йәки 29 кешегә кәмеп, 7228 бала тәшкил иткән. Стәрлетамаҡта иһә тыуым былтырғы кимәлдә, йәғни 1952 бала. Малайҙар (13691) ҡыҙҙарға (13156) ҡарағанда күберәк тыуған. 253 игеҙ һәм 5 өс бала донъяға килгән.

**Ольга МОРТАЗИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓БР Хөкүмәте ҡарары менән Илеш районының Бишҡурай ауылы мәктәбенә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың исеме бирелде. Осоусы ҡасандыр бында белем алған. Унда Муса Гәрәевтың музейы бар, бюсты ҡуйылған. Киләһе йыл ауылда данлыҡлы осоусының тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата ҙур сара үткәрергә йыйыналар, шул айҡанлы мәктәпкә капиталь ремонт яһаласаҡ.

✓Күптән түгел ойошторолған "Ирәмәл" тәбиғәт паркында контроль-үткәреү пункттары асылды. Улар ҡурсаулыҡ биләмәһенә инеү юлдарын төрлө яҡтан һаҡларға ярҙам итәсәк: тәүлек әйләнәһенә эшләгән пункттар Белорет районының - Николаевка, Силәбе өлкәһенең - Төләк, Учалы районының Яңы Хәсәйен ауылы эргәһендә урынлашҡан. Тиҙҙән Учалы районының Байһаҡал ауылы эргәһендә дүртенсе пункт эшләй башлаясаҡ. Парк биләмәһенә инеү әлегә бушлай.

✓Белем көнө алдынан Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы "Роспотребнадзор" менән берлектә мәктәптәрҙең техник йыһазланыш, хәүефһеҙлек һәм ғәҙәттән тыш хәлдәргә әҙерлек йәһәтенән тикшереү үткәрә. Төп иғтибар мәктәптәрҙең техник яҡтан һаҡланыуына бирелә. Беренсенән, биләмә тотош ҡойма менән уратылырға, ишек һәм ҡапҡа йоҙаҡҡа бикләнергә, ихатаға автотранспорттың инеүе сикләнергә тейеш. Икенсенән, һаҡ ҡуйылыуы зарур. Хәүеф төймәһе һәм видеокүҙәтеү системаһын ҡуйыу ҙа тәҡдим ителә.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты быйыл апрелдә I Тәбәк-ара "Башҡорт милли кейеме - дәүерҙәр мираҫы" асыҡ конкурсын иғлан иткәйне. Ижади бәйгелә төрлө йәштәге тегенселәр, рәссам-модельерҙар, мода студиялары, оҫтаханалар һәм башҡалар ҡатнаша ала. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн ғаризалар һәм материалдарҙы 1 декабргә тиклем Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитетына ебәрергә кәрәк: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 50, 216-сы бүлмә. Факс: 8 (347) 250-28-64.

✓РФ Һаҡлыҡ банкы банкоматтарының ҡайһы берҙәрендә ялған аҡса табылған. Ошо айҡанлы Һаҡлыҡ банкы идаралығында 16 августан Свердловск, Силәбе, Ҡурған өлкәләрендә һәм Башҡортостанда урынлашҡан ҡайһы бер банкоматтарҙа аҡса ҡабул итеү функцияһын һүндереп торорға ҡарар иткәндәр.

✓ *Ашҡаҙандың эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн 1 ҡалаҡ туралған андыҙ тамырына 1 стакан һыу ҡушып, 10 минут ҡайнатҡас, утты һүндерергә лә тиҙ генә 1 ҡалаҡ әнис үләне өҫтәргә.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӨФӨ УРАМДАРЫНДА...

## бер яҡлы хәрәкәт

**Баш ҡаланың тарихи үҙәгендәге ете урамда 10 сентябрҙән транспорт бер яҡлы ғына хәрәкәт итәсәк.**

Үҙгәрештәр Цюрупа, З. Вәлиди, Аксаков, Революцион урамдары менән сикләнгән участкаларға ҡағыласаҡ. Ленин урамы буйлап бер яҡлы хәрәкәт Пушкин урамынан Революцион урамы яғына табан китәсәк. Гоголь урамы буйлап - шул уҡ йүнәлештә З. Вәлиди урамынан Достоевский урамы яғына. Кире яҡҡа бер яҡлы хәрәкәт М. Кәрим урамы буйлап Революцион урамынан Коммунистик урамына, шулай уҡ Крупская урамы буйлап Достоевский урамынан Коммунистик урамына тиклем ойоштороласаҡ.

Чернышевский урамы буйлап транспорт Цюрупа урамынан Аксаков урамына тиклем бер яҡлы хәрәкәт итәсәк. Кире яҡҡа иһә Свердлов урамы буйлап Аксаков урамынан К. Маркс урамынаса үтергә мөмкин буласаҡ. Театр урамы буйлап Пушкин урамынан З. Вәлиди урамына тиклем бер яҡлы хәрәкәт ойоштороласаҡ.

Өфөнөң тарихи үҙәгендәге башҡа урамдарҙа транспорт хәрәкәте үҙгәрмәйәсәк. Сөнки уларҙың күпселегендә юлдар киңәйтелде, ике яҡлы хәрәкәт өсөн ҡаршылыҡтар юҡ.

- Яңы схема ҡала хеҙмәттәре һәм "Башкиргражданпроект" проект институты менән берлектә әҙерләнде, - ти ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк. - Ул транспорт хәрәкәтен нормаға килтерергә ярҙам итәсәк. Сөнки был урамдарҙа территорияның бәләкәй булыуы арҡаһында юлдарҙы киңәйтеү мөмкинлеге юҡ. Схема йәмәғәт транспорты пассажирҙары, шул урамдарҙа йәшәүсе халыҡ һәм баш ҡаланың тарихи үҙәге ҡунаҡтары өсөн мөмкин тиклем уңайлылыҡты иҫәпкә алып эшләнгән.

Бер яҡлы хәрәкәт индереү йәмәғәт транспорты маршрутын үҙгәртеүҙе лә күҙаллай. Был хаҡта өҫтәмә рәүештә хәбәр ителәсәк.




Схема Валерии Любиной.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛАЛАР ҺАНЫ АРТА ТӨШКӘН

**Әле генә күңелдәргә һағыш һалып, һуңғы ҡыңғырау сыңлағайны, тиҙҙән ул балаларҙы ҡабаттан парта артына ултырырға саҡырып, моңло сыңын яңғыратасаҡ. Ә белем усаҡтары уҡыусыларҙы ҡабул итергә әҙерме? Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов һәм мәғариф идаралығы етәксеһе Азамат Сәйфуллин был юлы журналистарҙы баш ҡала мәктәптәренең яңы уҡыу йылына әҙерлеге менән таныштырҙы.**

Балаларҙың каникулы осоронда төп иғтибар йылытыу сезонына әҙерлеккә, биналарға, аҙыҡ-түлек блоктарына капиталь ремонт үткәреүгә, янғын хәүефһеҙлеге талаптарын үтәүгә, ҡағиҙә боҙоуҙар булған осраҡта уларҙы бөтөрөүгә, мәктәп яны территорияһын тәртипкә килтереүгә, төҙөкләндереүгә йүнәлдерелгән. Бөгөнгә барлыҡ белем биреү учреждениеларында ла йылылыҡ системаларын гидравлик һынау уҙғарылған. 2011 йылда 53 мәктәптә, 53 балалар баҡсаһында, 9 өҫтәмә белем биреү учреждениеһында капиталь ремонт яһалған, әле 10 мәғариф учреждениеһының аҙыҡ-түлек блогында эш дауам итә.

Быйыл уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһе яңы форматта үткәрелде. 18 августа мәктәп директорҙары, уҡытыу һәм тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫарҙары, балалар баҡсалары мөдирҙәре, өҫтәмә белем биреү учреждениелары директорҙары өсөн биш дискуссия майҙансығы ойошторолдо. Райондарҙа кәңәшмәләр 19-22 августа үтеп бөтһә, ҡала кәңәшмәһенең пленар өлөшө 24 августа уҙғарылды. Бөгөн Өфөлә республика кәңәшмәһе үтә, уның программаһына ярашлы, төрлө райондарҙан килгән педагогтар биш маршрут буйынса баш ҡаланың белем биреү учреждениеларының эше менән танышасаҡ.

1 сентябрҙә 11 мең бала беренсе тапҡыр мәктәп тупһаһын атлап үтәсәк. Был былтырғы менән сағыштырғанда күберәк. Уҡыу йылы "Балалар Ышаныс телефонына "Эйе" ти!" тигән синыф сәғәтенән башланасаҡ. Шулай уҡ был көндә баш ҡаланың төрлө райондарында яңы балалар баҡсалары ла асыласаҡ.

# КӨҘГӨ ЙӘРМИНКӘЛӘР СТАРТ АЛА

**27 августан Өфөлә тәүге көҙгө йәрминкәләр асыла. Был көндө Спорт һарайы алдындағы майҙанда бал һәм картуф, һуған, шулай уҡ башҡа ауыл хужалығы тауарҙары һатып алырға мөмкин буласаҡ.**

3 сентябрҙә Ленин исемендәге майҙанда "Һөт иле" тип аталған бөтә Рәсәй фестивале уҙасаҡ. Ә Йәштәр һарайы (элекке "Юбилейный" мәҙәниәт һарайы) алдында 9, 10, 11 сентябрь бал баҙары эшләйәсәк. Шулай уҡ сентябрҙең һуңғы ике аҙнаһының ял көндәрендә һәм октябрҙең һәр шәмбе һәм йәкшәмбеһендә ҡаланың төрлө майҙандарында - ауыл хужалығы тауарҙары, ә декабрҙең ял көндәрендә ит һатыласаҡ.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Кейәү үләне (чабрец, бородская трава, тимьян)

Дарыу өсөн кейәү үләненең алһыу сәскәлеһе лә, күк сәскәлеһе лә ҡулланыла ала. Уны сәскә атҡан саҡта йыяһың. Һабағы ҡул менән һындырып алырлыҡ булһа, үлән өлгөргән, тигән һүҙ.

Үләнде еләҫ урында киптереп, тиреп, сепрәк тоҡта йәки быяла банкала һаҡларға. Мейестә киптерергә ярамай, сөнки уның составында эфир майҙары бар. Был еҫле үләнде ҡалаҡ осона ғына эләктереп, сәйгә өҫтәп ебәрһәгеҙ, сәйегеҙ тәмле булыр. Кейәү үләне эскелеккә, тәмәке тартыуға ҡаршы ҡулланыла, тик был осраҡта үләнде саманан артыҡ һалып төнәтергә ярамай. Һалҡын тейгәндә лә уның файҙаһы ҙур, ҡаҡырыҡты тиҙерәк сығарыуға ла булышлыҡ итә. Йүткергәндә йәки башҡа төрлө өҫкө тын юлдары ауырыуҙары булғанда ла ҡулланығыҙ.

Стрестан ҡотолоу өсөн дә кейәү үләне яҡшы: бер балғалаҡ үләнгә бер стакан һыу ҡойоп төнәткәс, хәл көйләнгәнсе, көнөнә ике тапҡыр 50-шәр грамм эсергә.

Бөйөрҙә таш йыйылыу менән бәйле сирҙәрҙән, бәүел тотмағанда берәр ҡалаҡ кейәү үләне һәм һары мәтрүшкә алып, өс стакан ҡайнар һыу менән төнәтеп, һөҙөп, көнөнә өс тапҡыр берәр стаканлап эсергә. 20 көнлөк дауалау курсын йылына 4-5 тапҡыр ҡабатлап торһаң, ул яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Матдәләр алышыныуын яҡшыртыу өсөн дә кейәү үләне, мелисса менән ҡайын япрағын берешәр өлөш алып, бергә боғатып, бер ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтеп, көнөнә икешәр стакан эсергә.

## Андыҙ

Йәй көнө еләк-емеште күп ашау һөҙөмтәһендә ҡайһы саҡта ашҡаҙанға көс төшә. Ашҡаҙандың эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн 1 ҡалаҡ туралған андыҙ тамырына 1 стакан һыу ҡушып, 10 минут ҡайнатҡас, утты һүндерергә лә тиҙ генә 1 ҡалаҡ әнис үләне өҫтәргә. Төнәтмә 5-10 минут торғас, уны һөҙөп, йылы көйөнә стакандың 1/3 өлөшө күләмендә ашарҙан 15 минут алда эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...



# ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТТӘР

**Ҡыҙым, бына һиңә 10 нәсихәт, уларҙы һис башыңдан сығарма:**

**1. Ҡәнәғәт була бел, үҙ хәлеңә шөкөр ит.** Йәғни, ирең өйгә ни алып ҡайтһа ла - ашар ризыҡ булһынмы, кейем булһынмы - уны иң гүзәл мөнәсәбәт менән, йылы ҡабул ит. Иреңә рәхмәт әйтеп, ризалыҡ күрһәт. Бәхетле ғүмер кисереүҙең беренсе юлы - үҙ хәлеңә шөкөр итеү. Хәлеңә шөкөр итмәгән, үҙ ҡаҙаныштарына ҡәнәғәтләнмәгән күңел хозурлыҡ тәмен, ҡәлеб рәхәтен тоймаҫ.

**2. Иреңә итәғәт ит, ҡушҡандарын эшлә, ҡушмағандарынан тыйыл.** Ирендең ҡолағын һаҡла - ул һинән тик матур, наҙлы ауаздар ғына ишетһен. Шулай итһәң, Аллаһы Тәғәлә һинән разый булыр, һәм йортоғоҙ шатлыҡ менән тулыр.

**3. Ирең күрәсәк ерҙәргә нык иғтибар ит.** Ирендең күҙен һаҡла - ул һине бөхтә итеп күрһен, өйөндөң эсен-тышын бик таҙа тот. Уның күҙенә бысраҡ, ерәнгес нәмәләр күренеүҙән һаҡлан.

**4. Ирендең танауын һаҡла.** Йәғни, өйөңдән дә, үҙеңдән дә насар еҫтәр килеп тормаһын, һинән күнеле ҡайтырлыҡ булмаһын. Шуны бел, таҙартыу һәм пакландырыуҙың иң һәйбәт ысулы - һыу.

**5. Аш-һыуҙы ваҡытында яҡшы итеп әҙерлә.** Сәғәте етеү менән алдына аш ҡуй. Килеп кергән унайы ашъяулырһың йәй. Шуны бел, ас кешенең асыуы яман.

**6. Йоҡоһон һаҡла.** Ҡайһы мәлдә йоҡларға ғәҙәтләнһә, шул мәлгә яҫтығын әҙерлә. Уға кәрәк сағында уят. Йоҡоһо туймау кешене йонсота, тимәк, һөйөү хисе лә юғала.

**7. Ирендең мал-мөлкәтенә һаҡсыл бул.** Уның малы - һинең малың. Ирендең байлығын урынлы ҡуллан, исраф итмә. Был да - һөнәр һәм ҡәҙер күрһәтә белеү.

**8. Ирендең туған-тыумасаһына хөрмәт күрһәт.** Уларға иғтибарлы булыуың - ирендең күңелен күреүең. Уларға хөрмәтең - иреңә хөрмәт күрһәтеүең. Был - кешеләрҙең ҡиммәтен һәм ҡәҙерен белеү.

**9. Ирендең серҙәрен һис кемгә һөйләмә.** Әгәр һөйләһәң, уны түбәнһеткән һәм һиңә булған ышанысын юғалтҡан булырһың. Шуның арҡаһында ғаилә нигеҙегеҙ боҙолор.

**10. Ирендең дингә ярашлы һәр әмерен ерена еткереп үтә.** Ҡаршылашыуың ыҙғышҡа килтерер һәм ғаиләгеҙҙән тынғылыҡ китер. Шуны ла бел: ирең хәсрәтле саҡта - шатланып, ул шатланғанда көйһөҙләнеп йөрөмә. Тәрбиәһеҙҙәр генә шулай ҡыланыр, һәм ҡылығың уның хис-тойғоһон һанламайһың кеүек тойолор.

Балам! Иреңә ни ҡәҙәр ҙур хөрмәт һәм ҡәҙер күрһәтһәң, үҙеңде шул ҡәҙәр һөйҙөрәрһең. Әйткәндәремдең киреһен эшләһәң, йәһәннәмдә утын булырһың. Заты шундай төркөмдән булған ҡатындарҙың ғаиләһе менән йәһәннәмдең айырмаһы юҡтыр. Бындай ҡатындар менән йәшәү - донъяла уҡ йәһәннәмгә юл тотоу. Ата-бабаларыбыҙ: "Ирен дәрәжәләмәгән ҡатынды йортонда тотма", - тигән. Балаларыңды нәсихәттәгесә тәрбиәлә лә Аллаһҡа тапшыр, ҡыҙың булһа - үрнәк бул!

Бына шундай өгөт-нәсихәт биргән бынан мең йылдан да әүәл йәшәгән әсә үҙ ҡыҙына һәм ул нәсихәттәрҙең, Аллаһ хозурында булғанлыҡтан, һис иҫкергәне юҡ.

**Гүзәр СИТДИҠОВА.**
**(Дауамы бар).**

СӘЙӘХӘТНАМӘ

**Ошо көндәрҙә Смоленск өлкәһенең Валутино һәм Лубино ауылдары эргәһендә матур сара: 1812 йылғы Ватан һуғышының иң дәһшәтле ваҡиғалары реконструкцияһы фестивале үтте. Бындай саралар өлкәнең туризмды үҫтереү буйынса махсус программаһы сиктәрендә бер-нисә йыл рәттән үткәрелә. Быйыл да был фестивалдә Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан, шулай уҡ Белоруссия, Литва, Польшанан килгән 40-ҡа яҡын хәрби-тарихи реконструкция клубы ағзалары меңәрләгән тамашасы алдында сығыш яһаны. Унда Өфөнөң "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы ағзалары ла ҡатнашты. Бөгөнгө һүҙебеҙ "Батыр ата-бабаларыбыҙ - "Төньяҡ амурҙары" юлы буйлап" тип исемләнгән сәйәхәт-акция барышында күргән-кисергәндәр, йәмғиәтебеҙҙең уникаль күренеше булған хәрби-тарихи реконструкция клубтарының йәшәйеше, был башланғысҡа йәштәрҙе йәлеп итеү, йәмәғәтселекте ойоштороу мәсьәләләре тураһында.**

# БАШҠОРТ ЯУГИРҘАРЫ ТУРАҺЫНДА...

## ситтәр белә, беҙҙә белмәйҙәр

### Юл башы доғаларҙан башлана

Иртәнсәк юлға сығыр алдынан Туҡай урамындағы мәсеткә һуғылдыҡ. Сәйәхәтте ойоштороусы етәксебеҙ Илдар Ғиндулла улы Шәйәхмәтов имамға үҙенең ниндәй маҡсат менән юлға сығыуы тураһында әйткәндән һуң, аяттар уҡылды, хәйерле юл теләнде. Мәсеттән башланған сәйәхәтебеҙ аҙаҡтан, клуб етәксеһенең баһалауынса, уңышлы юлдың нигеҙе булды Ер аяғы-ер башына барып та, бер ниндәй ҡытыршылыҡһыҙ еңел генә әйләнеп ҡайтыуыбыҙҙа Нефтселәр мәҙәниәт һарайы водителе Иҙрис Ғәлләмов ағайҙың һәр эшкә оҫта булыуы, төркөм етәксеһе атаман Илдар Шәйәхмәтовтың бар яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуы, педагог Виталий Полосиндың кешеләр менән эшләү тәжрибәһе, оператор Иван Исаковтың уғата иғтибарлы булыуы ҙур роль уйнаны. Шулай уҡ клуб ағзалары: эшҡыуар Айбулат Байғотлиндың, БДМУ студенттары Руслан Хөсәйеновтың һәм Эльвира Ғәйнуллинаның, мәктәп уҡыусылары Нәғим Ғәзизов, Айҙар Вәлитов, Павел Сәлимйәнов, Артур Мөхәмәтйәров һәм Айрат Халиҡовтарҙың ихласлығы, ярҙамсыллығы ла сәйәхәтебеҙ уңышлы үтеүгә булышлыҡ иткәндер, моғайын. Мәҙәниәт министрлығы тарафынан бүленгән "Фольксваген" микроавтобусында барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙе уңайлы тойҙоҡ. "Төньяҡ амурҙары" клубы етәксеһе, акцияға матди ярҙам ҡулы һуҙған Рәсүл Ҡарабулатовҡа, Ринат Байымовҡа, Илдар Юлбарыҫовҡа, Ханнан Ишмырҙинға, Әсҡәт Фәйзуллинға һәм Азат Фәйзуллинға сикһеҙ рәхмәтен белдерә. 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышының ошо иң дәһшәтле бәрелешендә ҡатнашҡан 1-се башҡорт полкы юлынан барыуыбыҙ, полк ғәскәре күргәнде аңларға, улар тойғанды тойорға, улар кисергәнде кисерергә тырышыуыбыҙ беҙҙе, сәйәхәт-акцияла ҡатнашыусыларҙы, бер бөтөн итте.

### Хәрби-тарихи клубтар

Хәрби-тарихи клубтар - йәмәғәт ойошмалары. Бындай клубтар, ғәҙәттә, энтузиастар тарафынан ойоштоцола. Тарихта билдәле булған берәй полктың яу кейеме менән ҡыҙыҡһына башлаған айырым кешеләр төркөмдәргә берләшеүҙән барлыҡҡа килә улар. Наполеон һуғышына арналған хәрби-тарихи клубтар, мәҫәлән, Европала ла, Рәсәйҙә лә бар һәм улар бер-береһе менән тығыҙ аралашып эшләй. Айырым клубтарҙың формалашыу тарихын ҡараһаҡ, уларҙың башында бер энтузиаст кеше торғанлығы күренә. Был эште тәүгеләрҙән башлап ебәреүселәр полк тураһында мәғлүмәт туплай, шулай уҡ тарихи факттарҙы өйрәнә. Матди база тупланыу менән, клубтар тарихи ваҡиғаларҙы яңынан тергеҙеү һәм тәүге һынланышында тамашасыға күрһәтеү, тәжрибә уртаҡлашыу һәм тыныслықты пропагандалау маҡсаты менән шөғөлләнә башлай.

Рәсәйҙә эшләп килгән 1812 йылғы Ватан һуғышы полктарын реконструкциялаусы клубтарҙың иң күренеклеләре - Рус армияһының "Литва уландары полкы", "Александр гусарҙар полкы" һәм Францияның Бөйөк армияһын көүҙәләндереүсе "33-сө линия пехотаһы полкы" клубтары һ.б. 1988 йылда ойоштолған "Литва уландары полкы" тәүҙән уҡ кавалерия ғәскәре булараҡ төҙөлә һәм атлылар сафында сығыш яһау буйынса махсуслаша. 1991 йылда Бородино һуғышы реконструкциялары ваҡытында был клуб беренселәрҙән булып яңынан тергеҙелгән һуғыш күренештәренә 1812 йылғы атлылар сафын сығара. Клубты Мәскәү, Екатеринбург, Пенза, Алабуға ҡалаларында йәшәүсе 20 кеше тәшкил итә. Башҡортостанда "Өфө пехота полкы" һәм "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубтары Наполеон эпохаһын реконструкциялау менән шөғөлләнә. Тәүгеһен Рәмил Рәхимов етәкләй. "Төньяҡ амурҙары" клубы Илдар Шәйәхмәтов тарафынан 2006 йылда ойошторола. Өфө клубтарын Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә лә бик яҡшы беләләр. Сөнки "Төньяҡ амурҙары" йыл һайын Рәсәй кимәлендә үткәрелгән реконструкция фестивалдәрендә ҡатнаша. Быйыл да октябрьҙә Германияның Лейпциг ҡалаһына юлланырға иҫәп тота клуб ағзалары.

### Башҡорт атлыларына берҙән-бер һәйкәл

2010 йылдың 4 сентябрендә клуб етәкселеге тарафынан Бородино һуғышында ҡатнашҡан 1-се башҡорт полкы яугирҙарына Можайск ҡалаһының көнбайышындағы ҡалҡыу урынға ҙур гранит ташҡа беркетелгән мәрмәр таҡтаташ ҡуйылғайны. Иҫтәлекле билдә - таҡтаташҡа беҙ сәскәләр һалдыҡ, иҫтәлеккә фотоға төштөк. Тарихтан билдәле булыуынса, 1-се башҡорт полкы казак генералы Платовтың ғәскәрҙәре составында Бородино һуғышына инер алдынан тап ошо урында торған. Стелаға гравёрлау ысулы менән рус һәм башҡорт телдәрендә "1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы 1-се башҡорт атлы



Илдар Шәйәхмәтов яңғыҙы ғына башҡорт яугирҙарын кәүҙәләндерә.



полкы яугирҙарына мәңгелек дан", тип яҙылған. Һәйкәлдең эскизын "Төньяҡ амурҙары" клубы етәксеһе, рәссам, Рәсәйҙең Геральдика йәмғиәте ағзаһы, беҙҙең сәйәхәттең етәксеһе Илдар Шәйәхмәтов эшләгән, һәйкәлде ошо урынға алып килеп ултыртыу эшен клуб идараһы рәйесе Илдар Юлбарыҫов ойошторған. Һәйкәл янында беҙҙең етәксебеҙ бына нимәләр һөйләне: "Үҙ сиратыбыҙҙа, 1-се башҡорт полкына халҡыбыҙ исеменән рәхмәтебеҙҙе еткергәнбеҙҙер, тип иҫәпләйем. Артабан 2-се, 3-сө, 4-се, 5-се һәм башҡа башҡорт полктарының да юлдарын барлауға, исемдәрен мәңгеләштереү эшәренә тотонасаҡбыҙ. 2-се башҡорт полкының Гродноны, Кобриноны алыуҙа ҡатнашҡанлығы беҙгә мәғлүм. Үкенескә күрә, Өфөлә ике тиҫтә кавалерия полкына, хатта Өфө тирәһенән йыйып алынған пехота полкына ла бер генә һәйкәл дә юҡ. Был хәлгә беҙ генә түгел, Мәскәү клубтары ағзалары ла хайран ҡала. Бородино һуғышына ике быуыт ваҡыт үткән булыуына ҡарамаҫтан, урындағы халыҡ ерҙәрен азат итеүҙә ҡатнашҡан башҡорт полктары тураһында онотмай. Һәйкәл янында ҡалдырылған бәләкәй иконалар ошо хаҡта һөйләй..."

## Беҙ килеүҙе ишетеп…

Калуга ҡалаһында йәшәүсе яҡташыбыҙ, яҙыусы Салауат Әсфәтуллин сәйәхәткә сығыуыбыҙҙы ишетеп, беҙгә ҡушылды. Стела янында оҙаҡ йылдар ситтә йәшәгән милләттәшебеҙҙән үҙебеҙ өсөн ҡыҙыҡлы фекерҙәр ишеттек:

- 1812 йылғы Ватан һуғышында егерменән ашыу башҡорт полкы ҡатнашҡан һәм бөгөн республикала ошо полктарға арналған бер генә һәйкәл дә булмауы башҡа һыймаҫ хәл. Һуғышҡа яңы ғына үҫмерлектән сыҡҡан йәш-елкенсәктән алып ир уртаһына еткән ғаилә башлыҡтары алынған. Уларҙың күбеһе, үкенескә күрә, был ҡанлы һуғыштарҙа башын һалған. Бөгөнгө йәштәр батырҙарыбыҙҙы оноторға тейеш түгел. Ҡалмыҡ халҡы был һуғышҡа ике полк биргән, иллә мәгәр ике полк исемен дә мәңгелләштереү хәстәрен күргән: Элиста ҡалаһында ҡалмыҡ яугирҙарына һәйкәл итеп ике ғибәҙәтхана төҙөлгән. Бөгөн ситтән килеүсе туристарҙы иң беренсе сиратта ошо ике күркәм ҡомартҡы менән таныштыралар. Ҡалмыҡ полктары тураһындағы тарих шулай йәшәй. Башҡортостан йәштәре лә ата-бабалары рухына тоғро ҡалып, республикабыҙ ҡалаларында һәйкәлдәр ҡойҙорор, тигән өмөттә ҡалам. Шул осорҙа йәшәгән рәссам Орловскийҙың теләһә ниндәй һүрәтен алып, һәйкәл итеп ҡойҙорорға була. Уның һүрәттәре тормошсан, ысынбарлыҡҡа тап килә: башҡорт яугиры мотлаҡ башҡорт атында һүрәтләнә. Республикала ике тиҫтәнән ашыу ҡала иҫәпләнә, ошо ҡалаларҙың һәр береһендә шул ҡала тирәһенән һуғышҡа киткән бер башҡорт атлы полкына арналған һәйкәл ҡуйылырға тейеш.

Был сараға шулай уҡ "Башҡортостан" киностудияһы режиссеры Айсыуаҡ Йомағолов та килде. Ул боронғо башҡорт яу ҡоралдарын, кейемдәрен, яугир образын кәүҙәләндереүсе егеттәрҙе видеоға төшөрөп алды. Киләсәктә режиссер нәфис фильм төшөрөргә ниәтләүе хаҡында белдерҙе.

## Еңелә лә белергә кәрәк…

Тарихи реконструкциялар үтә торған урынға килеп урынлаштыҡ. Мәғлүм булыуынса, Смоленск һуғышы тап ошо Волутино-Лубино ауылдары янындағы бәрелештәр менән билдәләнә. Был һуғышта Наполеон һуңғы тапҡыр рустарҙың өс армияһы араһына үтеп инеп, һәр береһен айырым тар-мар итергә ынтыла. Һөҙөмтәлә рус ғәскәрҙәре артҡа - Мәскәүгә ҡарай сигенеп, Соловьев кисеүендә берләшә. Был һуғышта французлар рус ғәскәренә ҡаты ғына удар яһай. Мәскәүҙе яндырып булһа ла Бородино яланында өс армия бергә берләшеп, дошманды боғаҙынан бороп ала, шул ерҙә Наполеон армияһын тамам хәлһеҙләндерә. Бородино һуғышының төп мәле шул: рустар бер туҡтауһыҙ туптан ата, французлар атлы ғәскәрен һөсләтә. Французларҙың ауыр кавалерияһының бер өлөшөн, Себастьяни полктарын тар-мар итеүҙә 1-се башҡорт полкы ла ҡатнаша. Был һуғышта башҡорттар һәм казактар 800-ҙән ашыу дошманды әсиргә ала.

"Һәр һуғышта ваҡытлыса еңелергә була. Һөҙөмтәлә ошо еңелеүең һиңә еңеү килтереүе мөмкин. Ваҡ-ваҡ еңелеүҙәрҙе ҙур еңеүгә әйләндергән стратегияны ҡуллана рус ғәскәре. Еңелә лә белергә кәрәк. Ә еңелер өсөн иң тәүҙә һуғышҡа ҡаршы тора белеү шарт. Шулай уҡ, үлгәс хөрмәтләп күмелер өсөн кешесә йәшәй белергә кәрәк..." - был һүҙҙәр тарихты һаҡлап ҡалыу, уны халҡыбыҙға шул килеш еткереү өсөн йәнен аямай көрәшеп йәшәгән Илдар Шәйәхмәтовтың йән ауазы.

## Яңғыҙ яугир яу ҡайтармай

Реконструкция фестивалдәренең, аралашыу сараһы булыуҙан тыш тағы бер маҡсаты бар: тыныслыҡ. Һуғыштарҙың ни тиклем ҡурҡыныс, кәрәкмәгән булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, тыныс тормошто пропагандалай бындай саралар. Яңы һуғыштарҙан түгел, ә элек үткән һуғыштарҙан фәһем алырға саҡыра яу яландарын кәүҙәләндереүселәр. Тәүге тапҡыр барһам да, шуны әйтә алам: пиротехниктар дарыны йәлләмәгән. Туптар шартлауҙан, атыш тауыштарынан тирә-яҡ гөрһөлдәп, ерҙәр тетрәп торҙо. Илдар Шәйәхмәтов башҡорт атаманы кейемен кейеп, ойоштороусылар биргән атҡа атланып, казактар полкына ҡушылды. Айбулат Байғотлин БДУ-ның Сибай институтының этнографик музейынан килтерелгән башҡорт яугирының тимер күлдәген кейеп алды. Үкенескә күрә, тимер еҫен ятһынып, уға тәғәйен ат Айбулат ағайҙы үҙенә мендермәне. Уның ҡарауы, уның тимер кейемен күргән һәр кем яҡын килеп, башҡорт яугирҙары менән ҡыҙыҡһынды.

Туптар атылған, йәҙрәләр шартлаған, мылтыҡтар атышҡан, ҡылыстар сыңлашҡан, аттар кешнәшкән сара аҙағынан башҡорт атаманы Илдар Шәйәхмәтовтың: "Беҙ, башҡорттар, был һуғышҡа 20 полк оҙатҡанбыҙ. Башҡорт атлы полкы яугирҙарын онотмағыҙ!" - тип, тамашасылар менән хушлашыуы тарихтан килгән ауаз һымаҡ яңғыраны. Әммә, 20 полк ойошторған башҡорттар исеменән бер уның ғына ат менеп сығыш яһауы күптәрҙә аптырау ҙа тыуҙырҙы. Ниңә ул яңғыҙы? Республика был сараға етдиерәк әҙерләнә алмаймы ни? Фестивалде ойоштороусы полковник Гопенконың беҙгә: "Һеҙ, башҡорттар, бында үҙегеҙҙе хужаларса тота алаһығыҙ, сөнки "Төньяҡ амурҙары", һеҙҙең ата-бабаларығыҙ, был һуғыштарҙа тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәткән", - тип әйтеүе үҙе үк ниндәйҙер ишара бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Әгәр ҙә бөгөн ниндәйҙер мөғжизә менән 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан берәй башҡорт яугиры терелгән булһа, республикабыҙҙағы хәлдәрҙе күреп, ни уйлар ине икән? Ҡасандыр үҙенең яугирлығы менән дә, мәҙәнилеге менән дә Европаны әсир иткән ғәскәрҙең вариҫтары араһында был тиклем дә данлы тарихына, мәҙәниәтенә битарафтар, хатта был тарихты аңламаусыларҙы осратып, хайран ҡалыр ине. Бынан һуң башҡаса уянмаҫҡа ла риза булыр ине, әгәр Илдар Шәйәхмәтов кеүек батырҙар сафының тулылана барыуы ғына уны тынысландырмаһа… Башҡортостан Республикаһының бөгөнгө хәле менән ул замандағы башҡорт иленең хәле араһындағы уртаҡ һыҙаттарға ла иғтибар итер ине. Ерҙәрен ситтәргә һатыуҙан баш тартҡан башҡорттарҙы ла сырамытып, таныр, үҙ итер ине… Тик иң ҙур йөрәк әрнеүе - хәҙерге башҡорттар араһында яугир тоҡомдарының ҡалмауы, ҡалғандарының да үҙ тамырҙарын белмәйенсә, замандың боролош-бөгөлдәрендә аҙашып, күңел асып ҡына йәшәүен күреп, иң тәүҙә көлөр ине, ә аҙаҡ… Әгәр үҙ заманына кире ҡайтһа, бында күргәндәрен башҡа яугирҙарға һөйләргә теләмәҫ ине…**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*АҠЫЛ҆ ҺАНДЫҒЫ*

# УРАЛ БАТЫРҘЫҢ...
## халыҡҡа әйтеп ҡалдырғаны

Еҫерҙәрҙең күҙенә керпек булығыҙ, тигән ғәжәйеп һүҙҙәр бар Урал батыр васыятында. Кеше күҙенә тилмереп ҡарап, башҡаларҙың мул ашағанына, матур йәшәүенә күҙҙәре ҡыҙып йөрөүселәр булырға тейеш түгел иләндә. Етем-еҫерҙең ымһыныуы, ә һинең иғтибарһыҙлығың йәшәү ҡотондо кәметә. Йәшәүеңдең ҡото кәмеһә, тормош мәғәнәһе юғала, үҙеңә генә түгел, нәҫеләңә тарала, тигән фекер ҙә бар эпоста.

*Беҙҙең илдә бар кеше лә -*
*Өлкәне лә, йәше лә -*
*Барыһы ла туғандай,*
*Бер әсәнән тыуғандай;*
*Илде талап йөрөмәҫкә,*
*Кеше ҡанын ҡоймаҫҡа;*
*Ил ыңйыһын йәшереп,*
*Ергә күмеп ҡуймаҫҡа!*
*Тапҡан-таянған бары*
*Һис айырым булмаҫҡа;*
*Көсләнөкө - байман тип,*
*Еҫерҙе сит күрмәҫкә…*

Тимәк, илде талау, кеше ҡанын ҡойоу, ил байлығын туплап, халыҡтан йәшереп тотоу, вазифалы булыуҙы байманлыҡҡа һанап, һауаланып, халыҡ хәленә инмәү - иң насар сифаттар. Ә халыҡ хәлен белеүҙең үлсәме - ул еҫер хәленә инеү. Бәхетле ил аталғаны - етемлекте тоймаған кешеләр иле. Үлем белмәгән ҡарт үҙенең иң бәхетле сағын былай тип иҫләй:

*Үлемде лә белмәнем,*
*Етемде лә күрмәнем.*

Маҡтауға, ҙурлауға, бүләкләүгә ынтылыу, ваҡытлыса биләгән түрәлегеңде мәңгелек тойоп маһайып, башҡаларҙы ҡыйырһытыу халыҡ юлында йөрөгән Шәхесте биҙәмәй. Һинең ысын ҙурлығың - кеше һөйөр ир булыу, еҫерҙе ситен күрмәү. Дан мәңгелек түгел, уны фәҡәт балаң "быуын-быуын" дауам итһә генә - ғәйрәтле, мәңгелек, тигән фекер ярылып ята Уралдың васыятында.

*Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй;*
*Ил батыры шул булыр -*
*Кеше һөйөр ир булыр.*
*Һинең даның ҡалһа ла,*
*Ҡулда ғәйрәт бөтөр ул.*
*Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,*
*Ил батыры - батырҙан,*
*Батыр ирҙәр тыуыр ул…*

Ил антын тотмағандарҙың йәшәү мәғәнәһе юғала, тигән иҫкәртеү ҙә бар эпоста.

*Ҡустым шуны тотманы.*
*Хәҙер илдән йыраҡта*
*Үҙе йәшәй тарлыҡта,*
*Ғүмере үтә зарлыҡта.*

Батырлыҡ, тигән төшөнсәгә бик киң мәғәнә һалынған. Ул яуҙа еңеүсе, дошмандарын ҡырыусы, халыҡты афәттән ҡотҡарыусы ғына түгел, ә тәрән ғилемгә эйә булыусы ла. Кеше, яҡшылыҡҡа йөҙөн бороп, яманлыҡтан баш тартып, тик камиллыҡҡа ғына ынтылып йәшәһә, фән һәм техниканың иң юғары ҡаҙаныштарына өлгәшә алыр.

*Күккә менер баҫҡысһыҙ,*
*Ерҙе асыр асҡысһыҙ.*

Ә илгә ундай батырҙар күп кәрәк. Көслөләрҙән дә, белемлеләрҙән дә, аҡыллыларҙан да, ҡыҫҡаһы, халыҡ идеалы булған Яҡшы кешенән халыҡ тарыҡмаҫ.

*Батырҙан ил тарыҡмаҫ,*
*Батыр һис бер зарыҡмаҫ*
*Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,*
*Яуҙан да һис талыҡмаҫ.*
*Яҡшынан эскәне - һыу булыр,*
*Ямандан эскәне - ыу булыр.*

Илдең таянысы Батыр бер ваҡытта ла үҙе өсөн генә йәшәмәй, ул һәр ваҡыт башҡаға ла юл яра, башҡалар өсөн дә ауырлыҡты еңешә.

*Батыр булған ир-егет*
*Еңмәҫ нәмә булырмы?*
*Батырмын, тигән ир-егет*
*Яуызға юл ҡуйырмы?*
*Утҡа ҡаршы һыу булыр ул,*
*Яуға ҡаршы тау булыр*
*Үҙенә түгел, барына*
*Ауырлыҡта юл булыр,*

Халыҡ хыял иткәнсә, илдә ҡашҡа булырҙай Батыр ирҙәр күп булһа, илдә яҡшылыҡ хөкөм һөрөр.

*Быуын-быуын үрсешеп,*
*Бергә уйнап-көлөшөп,*
*Байман табып ерләшеп,*
*Үткәндәрен йырлашып,*
*Көн итерҙәй ил булып,*
*Торасағын белдем мин.*

Бына шундай васыят - йәшәү ҡануны ҡалған беҙгә яҡты зиһенле, зирәк аҡыллы атай-олатайҙарҙан. Был яҙғандар иһә, халыҡ ижадының иң аҫыл өлгөһө "Урал батыр" эпосындағы аҡылдан һөҙөп алынған бик бәләкәй генә өлөш. Ә бит эпостағы һәр һүҙ, һәр юл ҡайта-ҡайта уҡырлыҡ, уйланырлыҡ аҡыл йомған үҙендә.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**(Аҙағы. Башы 34-се һанда).**

*✓ Башҡорттарҙа килгән кешене ҡунаҡ итмәйенсә сығарып ебәреү юҡ бит инде, өйгә килгән һәр кемде сәй эсереп, милли аштар ашатып сығара инек. Бергә йәшәгән башҡа милләттәр араһында абруйыбыҙ юғары ине.*



# ҠАРТАТАЙҘАРҘЫҢ ейәндәрҙе

**Улар икеһе лә башҡорт халҡының бөйөк шәхестәренең ҡатыны. Таңһылыу Әхмәт ҡыҙы Башҡортостандың атҡаҙанған химигы, техник фәндәр докторы, Өфө дәүләт нефть-техник университеты профессоры Әмир Фәтҡулла улы Ишкилдин менән 45 йыл иңгә-иң терәп ғүмер иткән. Тәлиғә Нәһетдин ҡыҙы - фольклорсы-ғалим, филология фәндәре кандидаты Мөхтәр Мофаззал улы Сәғитовтың ғүмер юлдашы. Етмәһә, үҙҙәре ҡоҙағыйҙар ҙа, ейәндәре Арыҫлан менән Кәримгә тормош һабаҡтары биреүсе өләсәйҙәр ҙә. Шулай ҙа бөгөнгө әңгәмәбеҙҙең күбеһенсә был донъянан иртә киткән ир-уҙамандар тураһында килеп сығыуы тәбиғи хәлдер, сөнки Әмир ағай менән Мөхтәр ағай ғүмеренең һәр көнөндә халҡы өсөн борсолоп йәшәһә, апайҙар, үҙ сиратында, уларҙы хәстәрләп, ҡурсалап торған. Шулай итеп, һүҙ -Таңһылыу ИШКИЛДИНА менән Тәлиғә СӘҒИТОВАға.**

**▸ Һеҙ - башҡортобоҙҙоң билдәле, үҙ милләте өсөн янып йәшәгән ир-азаматтарҙың ҡатындары. Ваҡыт үткән һайын, иҫтәлектәр тоноғая төшә, ҡайһы бер кешеләр хәтерҙән дә юйыла башлай. Гәзит уҡыусыларға Әмир Фәтҡулла улы һәм Мөхтәр Мофаззал улы тураһында бер аҙ һөйләһәгеҙ ине. Ниндәй кеше, ғаилә башлығы, атай, олатай булды улар?**

**Тәлиғә апай:** Мөхтәр Бөрйән районында тыуып үҫкән. Минең өсөн Бөрйән - иремдең тыуған төйәге генә түгел, ә гүзәл тәбиғәтле, күркәм холоҡло кешеләр йәшәгән бер мөғжизәле яҡ. Иремдең фольклорсы ла, этнограф та, яҙыусы ла булып китеүендә ошо тәбиғәттең дә, ошо кешеләрҙең дә йоғонтоһо булғандыр. Башҡорт телен, Башҡортостанды бик ярата, эш сәфәрҙәре менән сит илдәргә сыҡҡанда үҙе менән төрлө сувенирҙар алып китә ине. Башҡорт теленең моңон башҡа милләттәргә лә ишеттерергә тырышты. Бер ваҡиға хәтергә уйылып ҡалған: 1981 йылда ул Төркиәгә ғилми конференцияға барҙы. Конференция ҡиғиҙәләренә ярашлы, сығыш яһаусылар докладты өс: инглиз, немец, төрөк телдәрендә генә һөйләргә тейеш була. Мөхтәр Мофаззал улы башҡортса сығыш яһай, сөнки төрөк телен аңлаған кеше башҡорт телен дә аңлаясаҡ. Бына шулай, мөмкинлек булған һайын ситтә лә үҙ телендә һөйләшеп, башҡорт теленең моңон ишеттерә йөрөнө. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында өлкән ғилми хеҙмәткәр булып эшләне һәм бар ғүмерен башҡорт фольклорын йыйыу, туплауға бағышланы. 18 томдан торған "Башҡорт халыҡ ижады"ның дүрт китабын төҙөп, комментарийҙар биреп өлгөрҙө. Фольклор буйынса китаптарҙы рус теленә тәржемә итеүгә ҙур иғтибар бирә ине. Бигерәк тә Ғәзим Шафиҡовтың тәржемәләрен маҡтағаны хәтеремдә. Тап Мөхтәрҙең тырышлығы менән "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Алдар һәм Зөһрә" кеүек эпик әҫәрҙәрҙең сувенир баҫмалары донъя күрҙе. Үҙенең китаптары ла Мәскәүҙә, башҡа союздаш республикаларҙа, сит илдәрҙә баҫылды. Ситтә йәшәүсе башҡорттар араһында һаҡланып ҡалған фольклор өлгөләрен дә йыйҙы. Был маҡсат менән Саха Республикаһында, Румынияла булды. Ҡыҙғанысҡа күрә, Румынияла йыйған йыр өлгөләрен, фольклор буйынса материалдарын сығарып өлгөрмәй ҡалды, Төркиәлә фажиғәле рәүештә һәләк булып ҡуйҙы.

Ә нисек йырлар ине ул! Таушы, үҙәктәргә үтеп инерлек моңо һаман ҡолағымда сыңлап торғандай. 1978 йылда Ырымбурҙан "Шафиҡ" йырын табып алып ҡайтҡайны. Шул йырҙағыса, ғүмере һыу ағышы кеүек, тиҙ генә үтте. Белгәнен халҡына тиҙерәк еткерергә тырышты, ашҡынып йәшәне. Быйыл ағайыгыҙҙың вафатына 25 йыл да тулып китте.

**Таңһылыу апай:** Әмир Күгәрсен районының Бикес ауылында тыуған. Биографияһы ул замандағы һәр совет ғалимынығы кеүек: ауылдан килгәс, техникумда белем алыу, аҙаҡ - институтта, һуңынан - аспирантурала. Бик һәләтле, белемле ине, етмәһә, тырыш та, быны уның өс йыл эсендә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлап өлгөрә алыуы ла раҫлай. Техник вузда диссертация яҡлауы еңел түгел, уның ғәмәли тәжрибә өлөшө лә булырға тейеш. Ғөмүмән, мин уның фәнни эштәрҙе ыҙалап, башҡаларҙы ыҙалатып яҙғанын күрмәнем, шул тиклем эшен яратты. Был тормошта ниндәй дәрәжәгә өлгәшкән, барыһы ла үҙенең тырышлығы менән яулап алынғайны. Өфө дәүләт нефть-техник университетына тоғро ҡалды, декан да булды, ғүмеренең аҙағынаса шунда эшләне.

Әмир минең өсөн ышаныслы арҡа терәге ине, мин гел уның һүҙен тотоп йәшәнем. Шул тиклем юғары мәҙәниәтле кеше булды, уның тураһында бер ултырыуҙа ғына һөйләп бөтөрөрлөк тә түгел. Әмирҙе барыһы ла ятатты, йырға ла, бейеүгә лә маһир, нескә әңгәмәсе лә ине ул.

**▸ Ағайҙар менән ҡайһы ваҡытта, нисек танышып китеүегеҙ тураһындағы хәтирәләрегеҙ менән дә уртаҡлашһағыҙ ине...**

**Таңһылыу апай:** Мин үҙем дә Әмир кеүек тәүҙә нефть техникумында белем алдым. Заводҡа эшкә төшкәс, ул ваҡыттағы Өфө нефть институтының кискe бүлегендә уҡыным. Әмир ул саҡта кафедрала эшләп йөрөй ине. Гел генә кәүҙәһен тура тотоп, матур баҫып йөрөгән был егет, әлбиттә, иғтибарымды йәлеп итте. Үҙем дә уның күҙенә салынырға тырыша торғайным. Тик эшләп тә, уҡып та йөрөгәс, егеттәр һәм ҡыҙҙар таныша ала торған кисәләргә йөрөү мөмкинлегем булманы, буш ваҡыттарымда ла баш баҫып уҡып тик ултырҙым. Әмирҙең техникумда бергә уҡыған дуҫы мин йәшәгән ятаҡта йәшәй ине, беҙ уның менән заводта бергә эшләнек. Бер саҡ Октябрь байрамында шул егет мине үҙ бүлмәһенә сәй эсергә саҡырҙы. Барып инһәм, аптырап киттем: бүлмәлә Әмир ултыра. Ҡаушауымды еңеп, егеттәр менән ултырып сәй эстем. Шул уҡ кисте Ағиҙел буйына төшөп йөрөп килдек. Шулай танышып, дуҫлашып киттек. Оҙаҡ та үтмәне, өйләнештек. Әмир аспирантураны тамамлағансы, беҙҙең ике балабыҙ бар ине инде.

Йәш белгес булараҡ, Әмирҙе Афғанстанға ебәрҙеләр, ғаиләбеҙ менән шунда ла йәшәп ҡайттыҡ әле беҙ. Унда Әмир Ҡабул политехник университетында белгестәр әҙерләне. Ул ваҡытта сит илдә эшләүе еңел түгел ине, һәр аҙымыбыҙ күҙәтеү аҫтында булды. Хатта өйҙә лә шым ғына һөйләшергә ғәҙәтләнеп киткәйнек. Бер ҡаҙаҡ ғаиләһе менән дуҫлаштыҡ, бөтә байрамдар бергә үтә торғайны. Башҡорттарҙа килгән кешене ҡунаҡ итмәйенсә сығарып ебәреү юҡ бит инде, өйгә килгән һәр кемде сәй эсереп, милли аштар ашатып сығара инек. Шул ғәҙәтебеҙ менән дә бергә эшләгән, бергә йәшәгән башҡа милләттәр араһында абруйыбыҙ юғары ине. Өс йыл эшләгәндән һуң ҡайтырға йыйынғайныҡ, афған революцияһы башланып китеп, тыуған илгә юлды бер аҙға тотҡарланы. Ула арала Хәбир улыбыҙ уҡырға төштө. Бөтә Советтар Союзынан йыйылған төрлө милләт балалары бер класта ултырып уҡыйҙар, әҫәлеккә түҙмәй, иҫтәрен юғалталар. Шуға ла, балаларҙы уҡытырға кәрәк, тип, илселеккә, институтҡа хаттар яҙып, 1979 йылда Башҡортостанға ҡайттыҡ.



*Әмир бик һәләтле, белемле ине, етмәһә, тырыш та, быны уның өс йыл эсендә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлап өлгөрә алыуы ла раҫлай. Техник вузда диссертация яҡлауы еңел түгел, уның ғәмәли тәжрибә өлөшө лә булырға тейеш. Ғөмүмән, мин уның фәнни эштәрҙе ыҙалап, башҡаларҙы ыҙалатып яҙғанын күрмәнем, шул тиклем эшен ятатты. Был тормошта ниндәй дәрәжәгә өлгәшкән, барыһы ла үҙенең тырышлығы менән яулап алынғайны. Өфө дәүләт нефть-техник университетына тоғро ҡалды, декан да булды, ғүмеренең аҙағынаса шунда эшләне.*

**Тәлиғә апай:** Мин Мөхтәр ағайығыҙ менән танышҡанда Стәрлетамаҡ педагогия институтында өсөнсө курста уҡып йөрөй инем. Мөхтәр ул саҡта М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты аспиранты ине. Уның бер туған ағаһы - Әнүәр ҡайнаға минең менән бер курста уҡый. Беҙҙең курстағы ҡыҙҙар береһенән-береһе сибәр булды, ә мин үҙемде матур тип иҫәпләмәй инем. Бер тапҡыр шулай беҙҙең төркөмгә кемдер инеп:"Ана, аспирант килгән, ҡарап ҡалығыҙ", - тип хәбәр һалды. Мин коридорға сығып, бер тапҡыр ғына күҙ аттым да, яңынан аудиторияға инеп ултырҙым. Аҙаҡ асыҡланыуынса, Әнүәр ҡайнаға ҡустыһына күрһәтер өсөн ун ҡыҙ әҙерләп ҡуйған, улар араһында мин дә булғанмын. Шулай итеп, Мөхтәр ун ҡыҙ араһынан мине һайлап алды. Бик матур ине ул йәш сағында, сәстәре тулҡынланып тора ине. Шунан алып беҙ каникул һайын осраша башланыҡ. Мин Мөхтәрҙе үҙемдең диплом алыу тантанаһына саҡырҙым, ул килергә ризалыҡ бирҙе, тик ашығыс рәүештә Мәскәүгә сығып китеп, килә алманы. Мин ныҡ ҡына үпкәләнем инде, йәнәһе, диплом һынлы диплом алған ваҡытта ла бушамағас! Йүнәлтмә буйынса Салауат районына киттем, әммә Мөхтәргә был турала хәбәр итмәнем. Кәрәк булһа, эҙләп тапһын, имеш. Ваҡыт үтә, мин һыр бирмәй йөрөгән булам. Ноябрҙә поезд менән Мөхтәр килеп төшмәһенме! Аңлаштыҡ. Уҡыу йылы тамамланғас, Мөхтәр мине Өфөгә алып китте. Бына шулай уйламай ҙа артынан эйәреп китерлек егет ине ул. Барыһы менән дә уртаҡ тел таба белә, ягымлы, бер йылмайып ебәрһә, барыһын да үҙенә мөкиббән иттерә лә ҡуя.

Мин тәүҙә мәктәптә математиканан уҡыттым, аҙаҡтан БДПУ-ла эшләнем. Кафедра ултырышы булып, эштә оҙаҡлабыраҡ китһәм дә, асыуланмай торғайны. Ундай ваҡыттарҙа үҙе балаларҙы баҡсанан ала, ашарға бешереп ҡуя. Ағайығыҙ минән һигеҙ йәшкә олораҡ ине, шуға ул минең өсөн тәрбиәсе лә булды, тип әйтә алам. Ошолай эшләһәң, яҡшыраҡ булыр, тип, минең күңелемде төшөрмәй, йөҙөмдө йыртмай ғына һабағын да биреп ҡуйыр ине. Миңә, балаларға ғына түгел, бар кешегә лә яҡшы була белде. Райондан баш ҡалаға килеп-китеүсе күп, уларҙың барыһын да яҡты йөҙ менән ҡаршылап, ҡулынан килгәнсе ярҙам итеп ҡайтара ине. Мин үҙем Силәбе өлкәһенең Әшә ҡалаһынан. Бер саҡ балалар Әшәлә инәйем менән атайым эргәһендә ял итә. Мин улар эргәһенә барып килдем дә, Өфөгә ҡайтып, өйгә инһәм, фатирҙа бер әбей ултыра. Бөрйәндәндер инде, тип уйлаған булам. Сәй эстек, инәйҙе йоҡларға һалдыҡ. Шым ғына Мөхтәрҙән, кем ул, тип һорайым. Баҡтиһәң, автовокзал эргәһенән үтеп барһа, туҡталышта бер әбей ултырған. Ауылдан килгән дә, туғандарын таба алмай, аҙашҡан икән. Мөхтәр уны үҙебеҙгә алып ҡайтҡан. Иртәнсәк туғандарын табып, апайҙы алып барып ҡуйҙы. Бындай ваҡиғалар йыш ҡабатлана торғайны беҙҙең ғаиләлә.

***✓ Башҡорт балаһы мотлаҡ рәүештә башҡорт мәктәбендә уҡырға, башҡорт мөхитендә үҫергә, иптәштәре лә үҙ милләтенән булырға тейеш. Минекеләр икеһе лә 20-се ҡала башҡорт гимназияһын тамамланы.***

**▸ Һеҙ ирегеҙгә, милләтегеҙгә тоғролоҡ һаҡлай белгән, үҙ халҡығыҙға матур холоҡло балалар үҫтергән ҡатындарһығыҙ. Иң мөһиме, һеҙ башҡорт ғаиләһенең иң күркәм моделен тыуҙыра алған ғаиләләр ҡора алғанһығыҙ. Ошо моделдә тыуҙыра алмай тырым-тырағай йөрөгән хәҙерге заман йәштәренә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

**Таңһылыу апай:** Минең әсәйем боронғоса матур тәрбиә алған кеше ине, атайым бер аҙ дыуамалыраҡ холоҡло булды. Уларҙың икеһененң тәрбиәһе лә миндә сағылыш тапҡандыр, тип уйлайым. Берҙән, сабырмын, икенсенән, дыуамаллыҡ та бар. Ә Әмирҙе атаһы менән әсәһенән тыш, күберәк өләсәһе тәрбиәләгән. Шуға ла унда аҡһаҡалдарға хас олпатлыҡ, тәрән аҡыл, һүҙҙе аҡрын һәм үлсәп кенә һөйләү кеүек сифаттар өҫтөнлөк итте. Ҡайным

# МАТУР ӨЛГӨҺӨНДӘ...

## тәрбиәләйбеҙ

Ҡөрьән уҡый ине, иҫкесә лә, яңыса ла хәреф таныны, беҙгә никахты ла үҙе уҡыны. Ә ҡәйнәм ысын башҡорт ҡатынының өлгөһө булды. Бер ҡасан да кеше һөйләмәне, шуға ҡайһы саҡта уның тураһында насарыраҡ һүҙ әйтһәләр, мин дә шыма ла ҡуя торғайным. Ғөмүмән, мин Әмирҙәрҙең ғаиләһендәге бер-береһенә булған яғымлы, яҡшы мөғәмәләгә гел һоҡлана инем. Ошонан сығып, шундай һығымтаға килергә була: бала ғаиләһендә нимә күрә, үҫкәс үҙе лә шуны ҡабатлаясаҡ. Шулай ҙа ир, атай кеше көслөрәк булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙ ир арҡаһына ышыҡланып, иркәләнеп кенә йәшәһен өсөн быныһы бигерәк мөһим. Мин гел генә ирем нимә әйтһә, шуны эшләнем, бер ҙә һүҙенән сыҡманым.

Өйҙә гел башҡортса һөйләштек. Балаларыбыҙ Хәбир менән Гөлфиәнең дә, ейән-ейәнсәрҙәрҙең дә теле башҡортса асылды. Әмир башҡорт телендәге һәр китапты һатып алырға тырыша ине, шуға ла ул һәр яҙыусының һәр әҫәрен уҡымаған хәлдә лә, уларҙы ҡараштырып сыҡҡан кешеләр рәтенән булды. Гәзит-журналдар тураһында әйтеп тә тормайым. Ошо холоҡ балаларға ла йоҡҡан. Мәҫәлән, Кәрим ейәнем дүрт йәшендә Рәми Ғариповтың ҡайһы бер шиғырҙарын яттан белә ине. Хәҙер, балалар китап уҡымай, тиҙәр, минең ейәнем китаптарҙы китапханаға барып уҡый. Үҙ милләтеңә тоғро булып йәшәһәң, уға хеҙмәт итергә ынтылһаң һәм һәр ваҡыт кеше тигән исемгә тап төшөрмәһәң, шунан артыҡ бер нәмә лә, сит илдең әллә ниндәй тәрбиә өлгөләре лә кәрәкмәй.

Тағы бер нәмә: башҡорт балаһы мотлаҡ рәүештә башҡорт мәктәбендә уҡырға, башҡорт мөхитендә үҫергә, иптәштәре лә үҙ милләтенән булырға тейеш. Минекеләр икеһе лә 20-се ҡала башҡорт гимназияһын тамамланы. Әле Кәрим ейәнебеҙ ошо уҡ гимназияла белем ала, уның хатта ҡайһы саҡта гимназиянан ҡайтҡыһы ла килмәй. Өйгә уйнарға иптәш малайҙары ла килә, уларға ҡарап, башҡорт халҡының холҡо ла башҡараҡ икәнен күрәм. Тыныстар, бер-береһенә үсегеп, дошманлашып бармайҙар, көслөләр. Рухты өйҙә тәрбиәләйһең, әлбиттә, тик мәктәп тә баланың тормошонда ҙур роль уйнай. Олоһо Арыҫлан тәүҙә 20-се гимназияла уҡыны, уны аҙаҡ Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына күсерҙек.



**Тәлиғә апай:** Ҡоҙағыйымдың, өйҙә башҡортса һөйләшергә кәрәк, тигәне менән тулыһынса килешәм. Беҙ балаларҙы башҡорт мәктәбенә биреүҙе, ни өсөндөр, мөһим тип һанаманыҡ. Телде яҡшы белһәләр ҙә, русса һөйләшеп алған осорҙары булды. Юлай улым былай гел башҡортса һөйләште. Хәҙер кейәү ҙә, Гөлшат ҡыҙым да тик башҡортса һөйләшәләр.

***Мөхтәр башҡорт телен, Башҡортостанды бик ярата, эш сәфәрҙәре менән сит илдәргә сыҡҡанда үҙе менән төрлө сувенирҙар алып китә ине. Башҡорт теленең моңон башҡа милләттәргә лә ишеттерергә тырышты. Бер ваҡиға хәтергә уйылып ҡалған: 1981 йылда ул Төркиәгә ғилми конференцияға барҙы. Конференция ҡиғиҙәләренә ярашлы, сығыш яһаусылар докладты өс: инглиз, немец, төрөк телдәрендә генә һөйләргә тейеш була. Мөхтәр Мофаззал улы башҡортса сығыш яһай, сөнки төрөк телен аңлаған кеше башҡорт телен дә аңлаясаҡ. Бына шулай, мөмкинлек булған һайын ситтә лә үҙ телендә һөйләшеп, башҡорт теленең моңон ишеттерә йөрөнө.***

Гөлшат педагогия институтын тамамланы, икенсе юғары белемде финанс-иҡтисад йүнәлешендә алды. Әле игеҙәктәре менән өйҙә ултыра. Ә Юлай улым Ишкилдиндарҙың кейәүе, табип булып эшләй. Минең иң оло таянысым һәм терәгем улар.

**▸ Ҡалала милли традицияларҙы һаҡлап ҡалыу ҡыйынылраҡ, әлбиттә. Уларҙы үтәү йә дини йолаларға, йә ғаилә эсендәге традицияларға ҡайтып ҡала. Ә һеҙ, боронғо йола буйынса, балаларығыҙҙы ла үҙегеҙ таныштырып өйләндергәнһегеҙ икән.**

**Таңһылыу апай:** Беҙ йәшерәк саҡта "Аҡ тирмә"нең эшмәкәрлеге көслө булды. Унда мин дә, ҡоҙағый ҙа йөрөнө, яҡындан таныш булмаһаҡ та, бер-беребеҙҙе танып белә инек.

Шулай бер саҡ аҙыҡ-түлек магазинына киттем. Ғәҙәттә, Пасха байрамы алдынан магазиндарҙа йомортҡа булмай, тиҙ генә һатыр алып бөтәләр. Ә миңә шул ваҡытта нимәгәлер йомортҡа бик кәрәк ине. Универсамдан сыҡтым да, буласаҡ ҡоҙағыйымды осраттым. Һөйләшеп киттек. Йомортҡа эҙләп йөрөгәнемде белгәс, мине өйөнә алып ҡайтып китте. Барҙым, сәй эстек, оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырҙыҡ.

**Тәлиғә апай:** Шунан яҡындараҡ аралашып киттек инде. Бер саҡ ҡыҙым Гөлшатты башҡорт егеттәре менән таныштырырға теләп, уның тыуған көнөнә йәштәрҙе йыйҙыҡ. Унда улым Юлай ҙа, буласаҡ киленем Гөлфиә лә булды. Гөлшатҡа бер егет тә оҡшаманы, ә Юлай менән Гөлфиә дуҫлашып алып китте. Өйләнешеүҙәренә бик шатландым. Миңә иртә тол ҡалып, балаларҙы яңғыҙыма үҫтерергә тура килгәс, килендең бик шәп, етмәһә, таныш ғаиләнән булыуы оло бәхет тойолдо. Шунан алып Әмир ҡоҙа беҙҙең ғаилә өсөн дә бер терәккә әүерелде.

**Таңһылыу апай:** Магазин төбөндә осрашыуыбыҙ бер сәбәп булғандыр инде. Хәҙер икәүләшеп уртаҡ ейәндәребеҙгә ҡарап, ҡыуанып ултырабыҙ. Уларға ҡартаталары тураһында һөйләйбеҙ. Ейәндәребеҙ ике ҡартатай менән дә ғорурлана, уларға оҡшарға тырыша. Ҡартатайығыҙҙың насар ҡылыҡ ҡылып, насар һүҙ һөйләгән сағын күргәнегеҙ булманы, үҙегеҙ ҙә йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәгеҙ, тип әйтеп торам. Ейәндәре менән үҙе лә балаға әүерелә ине Әмир, әкиәт һөйлә, тиһәләр, әкиәт һөйләр ине. Өләсәһе эргәһендә йөрөп үҫкәнлектән, телгә бай ине, әкиәттәрҙе лә күп белде. Оло ҡәйнәм телгә бик оҫта булды. Отпускыға ғына ҡайтҡан арала аралашып туймай инек. Урманға емеш йыйырға барһа - шул емешкә арнап, үлән йыйһа - үләнгә арнап шунда уҡ йыр сығара ине ул. 90 йәшкә тиклем йәшәне, аҡылы теүәл булды. Ҡайным да 90 йәшкә етте. Халыҡта, нәҫелендә оҙаҡ йәшәүселәр ни тиклем күберәк булһа, балалары ла оҙаҡ йәшәй, тигән ышаныу бар, фән дә быны дәлилләй. Әмиргә гел генә, һин оҙаҡ йәшәйәсәкһең, тип әйтә торғайным. Әҙерәк йәшәне шул, быйыл октябрь айында етмеше генә тулыр ине.

**▸ Бөгөн күптәр башҡорт ҡатын-ҡыҙын тыйнаҡ, етди, өндәшмәҫ, ҡыйыуһыҙ булыуҙа ғәйепләй. Һеҙҙеңсә, хәҙерге заман башҡорт ҡатын-ҡыҙы ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Замана менән бергә гүзәл зат та үҙгәрергә тейешме?**

**Таңһылыу апай:** Замана үҙгәрә, тип, ҡатын-ҡыҙға үҙгәрергә кәрәкмәйҙер. Кем әйткән әле тыйнаҡ, әҙәпле булыуҙы кире сифат тип?! Тап ошо сифаттарыбыҙ беҙгә башҡорт булып һаҡланып ҡалырға ярҙам итәлер ҙә әле. Ҡыйыуыраҡ булырға кәрәк, тигәне менән килешәм, әммә быны һәр ергә үтеп инергә кәрәк, тип аңларға ярамай. Ҡатын-ҡыҙҙың бар бәхете - ир ҡатыны һәм әсә булыуҙа. Шуға яратҡан кешеңде яулау һәм уны юғалтыуға юл ҡуймау өсөн ҡыйыуыраҡ булыу кәрәк.

**Тәлиғә апай:** Ҡатын-ҡыҙ аҡыллы булырға тейеш. Ғаилә көткәндә килеп тыуған төрлө хәлдәрҙе унан башҡа бер кем дә ыңғай ғына итеп көйләп ебәрә алмай. Баҫалҡылыҡ ана шул аҡыллы була белеүҙән килмәйме икән? Ҡәйнәм дә баҫалҡы булды. Мин һәр нәмәне уға ҡарап өйрәнергә тырыша инем. Уның өйөндә гел тәртип, бер ауыр һүҙ әйткән кеше юҡ, донъялары түп-түңәрәк ине. Бер үҙе 9 бала үҫтергән ҡәйнәм балаларына һөйөүен белдереүҙән тартынманы, Мөхтәрҙе бигерәк яратты, ҡайтһаҡ, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Килен, сереңде бер кемгә лә, хатта миңә лә һөйләмә, ана, тышҡа сыҡ та бағанаға һөйлә, ти торғайны.

Бөгөнгө заманда ҡатын-ҡыҙ араһында насар ғәҙәттәрҙе үҙләштереүселәр бар, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта уларҙың ҡапма-ҡаршыһы булған инсафлы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күп. Һәр кем үҙенең юлын, йәшәү рәүешен үҙе һайлай. Һуңғы осорҙа юҡ ҡына ваҡиғаны ҡуйыртып, шуны сәбәп итеп, тиҙ генә айырылышып ҡуйыусы йәштәр күбәйҙе.

**Таңһылыу апай:** Бындай хәл булмаһын өсөн кешене яҡшылап өйрәнергә кәрәк. Бына мин Әмир менән дуҫлашҡанда уның төрлө ситуацияларҙа үҙен нисек тотоуын гел күҙәтеп йөрөнөм. Кешене үҙгәртеп булмай, хатта уны үҙгәртергә тырышырға ла кәрәкмәй. Ҡыҙҙарыбыҙ ғына түгел, егеттәребеҙ ҙә үтә баҫалҡы беҙҙең. Шуның өсөн дә башҡорт балаһы башҡорт мөхитендә тәрбиәләнергә, улар бер-береһе менән танышып үҫергә тейеш. Шунда ҡатнаш никах проблемаһы ла булмаҫ. Бына ейәнсәрем ҡайҙа йөрөһә лә гел башҡорттар менән танышырға тырыша. Сөнки беҙ уға бәләкәйҙән шуны һеңдерҙек. Арыҫлан ейәнебеҙ быйыл гимназия-интернатты тамамланы, ул да башҡорт ҡыҙы менән дуҫлаша, һуңғы ҡыңғырау байрамында бергә бейенеләр. Хоҙай беҙҙе милләт итеп яралтҡан икән, беҙ үҙ милләтебеҙгә балалар үҫтерергә тейеш. Ҡатнаш никах ҡорған ғаиләләрҙә башҡорт балалары үҫмәй икәне хәҙер бер нисә быуында ныҡлап иҫбатланды инде...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙың борондан килгән аҡылы, дини ҡанундар буйынса ла, ғаиләлә ир ҡатынынан риза булырға тейеш, тип әйтелә. Таңһылыу һәм Тәлиғә апайҙарҙың ҡатын-ҡыҙ бәхетенең нигеҙен дә тап ирҙе ир итеп күтәрә белеү тәшкил итәлер, моғайын. Ғаиләлә ир - ир, ә ҡатын - ҡатын урынында булып, һәр кем үҙенә тәғәйенләнгән бурыстарҙы еренә еткереп башҡарһа, Ишкилдиндар һәм Сәғитовтар кеүек матур ғаиләләр күберәк булыр ине. Яҡшы ғаилә генә түгел, ә идеаль коллектив, хатта идеаль йәмғиәт моделе лә ошонан ғибәрәт түгелме һуң?**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмә ҡорҙо.**

те буйынса, өҫкә ҡараш ташлар булды. Ҡарашы менән һағынып бөткән ҡанатлы дуҫын эҙләне. Ләкин уны һәр саҡ йә тап-таҙа бушлыҡ, йәиһә ҡайнап торған болоттар ҡаршы ала ине. Бөркөт бүтәнсә күренмәне, ҡайҙалыр олағып гәйеп булды.

Ерге сафлыҡ, донъяға паклыҡ өҫтәп тәүге ҡар яуҙы. Кеше, болоҡһоған күңелен бушатып, ярһыған йөрәген тынысландырыу маҡсатында, ҡырпаҡ ҡарҙы кисеп йөрөп килмәксе. Юғиһә, биләмәләрен әллә ҡасандан күргәне юҡ. Бөркөтө осоп киткәндән бирле. Үҙе лә һиҙмәҫтән аяҡтары бөркөт оялы ҡарт ҡарағай яғына тартты. Барып еткәс тә аптырауҙан алйып, хатта тын алырға ла онотоп, ынағас ише ҡатып торҙо. Йөҙйәшәр бәһләүән ҡарағай... ауып ята ине. Бөркөттөң ояһы туҙған, ҡоро сыбыҡ-сабыҡ ер өҫтөнә сәселгән. Кинәт хәле бөтөүҙән быуыны ҡалтыранып киткән Кеше төбөнән бысып йығылған йыуан ағас һыртына ултырҙы. "Леспромхоз, ҡәһәрең, бында уҡ килеп еткән икән!" - тип ярһып уйланы. Нимәгә хәжәте булды икән уларға мәлйей башлаған, һыйыҡйоролҡ ҡарт ағастың?! Һәм... ҡапыл күк ҡабығы ярылып киттеме ни! Зиһене асылып, Кешенең аңына барып етте. Бөркөт-таҙғара мотлаҡ ошоноң кеүек йөҙйәшәр ҡарағайҙарға ғына оя ҡора бит! Ә ундай ағастар хәҙер был тирәлә үтә һирәк ҡалған. Ҡалһа әле! Ошоноһо һуңғыһы булмағайы... Шунан, хәҙер ҡайҙа барып һыйынһын бисара бөркөт? Әлбиттә, төйәген ташлап, сит-ят яҡтарға олағырға, әҙәми заттан йырағырак китергә мәжбүр. Бына ҡайҙа уның әтнәкәһе! Әлеге лә баяғы, һаман да шул нәфсе тигәнен. Әҙәмдең мәңге туймаҫ нәфсеһе! Быуаттар буйы олон йыуанайтып, тамыр йәйгән ағастарын, кейеккә ышыҡ булыр урманын ҡырып-һепереп, Уралтау һыртын таҙлы баш сүрәтенә индерҙек. Имеш, ағас һатып донъя бөтәйтәбеҙ, кеҫә ҡалынайтабыҙ. Ҡылана торғас, мәшһүр бөркөттәребеҙҙән яҙғаныбыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ түгелме һуң? Уларҙы оя ҡорор ағастарынан, тыуған төйәгенән мәхрүм иткәнбеҙ. Алда әле әллә ниҙәр булыр. Быныһы, күрәһең, башы ғына, бары емеш бирә торған сәскәһе. Теге Бөркөт Кеше күҙенә салынып ҡалған һуңғы таҙғара булып сыҡмаһа ярай ҙа...

Бөркөт үҙенә ҡул күтәреп, мылтыҡ тоҫҡаған әҙәм аҡтыҡтарына, гәзиз балаларын тәләфләгән оңҡот ҡоҙғондарға, оя ҡорор ағасын ауҙарған мәғәнәһеҙ урман ҡырҡыусыларға, зәғиф итә яҙған яһил бүрегә ҡарата булған барлыҡ үпкә-нәфрәттәрен үҙе менән алып китте. Онотолмаҫ һағышы ғына тороп ҡалды. Бәлә килгәндә ҡурсалап, күҙ йәштәре аша ҡул болғап оҙатҡан Кешегә генә сикһеҙ рәхмәтле ине ул. Кеше Бөркөт өсөн берҙән-бер мәрхәмәтле йән эйәһе булып ҡалғандыр. Әйләнеп ҡайтырмы үҙ төйәгенә алтын яллы, аҡ ярынлы һоҡландырғыс ҡыйғыр ҡош? Ошо яуапһыҙ ауыр һорау борсой бөгөн Кешене, ҡырлы шырау булып йөрәгенә ҡара ҡан һауҙыра, аяу белмәй бәгерен өйкәп тик тора.

(Аҙағы).

УЙЛЫҒА -УЙ

**Филология, педагогика факультеттарында белем алған күп иптәштәремдең юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң үҙләштергән һөнәре буйынса эшләмәгәнен беләм. Бына әле осраҡтан таныш ҡыҙ ҙа: "Мәктәпкә ике аяғымдың береһен дә баҫмаясаҡмын. Енем һөймәй балаларҙы!"- тип, үҙ хәбәрҙәрен һөйләп китте. "Һуң балаларҙы яратмағас, нишләп уҡытыусы һөнәрен һайланың?" - тигән аптыраулы һорауыма бөгөн бик ғәҙәти яңғыраған яуап алдым: "Ата-әсәйем юғары белем ал, шуныһы хәҙер эш табыуы ауыр. Исмаһам, һин ыҙаламай йәшә, тип уҡырға индереп ебәрҙеләр бит…" "Бәй, юғары белемде башҡа йүнәлештәр буйынса ла алырға мөмкин инде, мотлаҡ уҡытыусы булмаһаң, үҙеңә оҡшаған икенсе һөнәрҙе һайлар инең, атай-әсәйең ярҙам итер ине барыбер", - тип ныҡышыуымды дауам иттем. "Башҡа урында уҡыуы ауыр булыр тип ҡурҡҡайным шул. Хәҙер үкенәм. Бушҡа ғына берәй техник университетҡа бармағанмын, ана, кешеләр шау өслөгә уҡып бөтөп тә эш таба. Мин бында "биш"леләрем менән эшһеҙ ыҙалап йөрөйөм", - булды яуап. Танышымдың был һүҙҙәре оҙаҡ ҡына күңел төбөндә йөрөнө.**

# ҮҘ УРЫНЫҢДЫ ТАПТЫҢМЫ?

## Йәки йәш кешенең ниңә эшһеҙ булғаны тураһында




### Мотлаҡ юғары белем, ти ата-әсә…

Балаларын мотлаҡ юғары уҡыу йортонда уҡытырға теләүсе ата-әсәләрҙе аңларға мөмкиндер. Улар йәш саҡта белем алыу бушлай, стипендия етерлек булған, студент йәшәр урын юҡлыҡтан ыҙаламаған. Ул саҡта йәш белгес өсөн дәүләт барыһын да хәл иткән: буласаҡ эш урыныңа йүнәлтмә, аҡсалата ярҙам (подъемная), торлаҡ гарантияланған. Ә бөгөн мәктәпте тамамлаған бала үҙ иркенә ҡуйыла: теләһә - уҡыһын, теләмәһә инде... Офоҡтар киң, мөмкинлектәрендә файҙалана ғына бел, тип ҡабатларға яратабыҙ. Ә егермеһе лә тулмаған, донъя күреп өлгөрмәгән бала үҙенә нимә кәрәк, нимә юҡ икәнен беләме һуң - быны менән береһе лә ҡыҙыҡһынмай. Тик ата-әсәһе генә уға, юғары уҡыу йортона уҡырға инеп, кеше булып сығырға тейешһең, тип туҡылдай бирә, төрлө ысулдарын табып, ошо теләген тормошҡа ашыра тора.

Студент булып китеүе лә ябай эш түгел. Имтихандарҙы ла компьютерҙар ҡабул итә башланы бит хәҙер. Йәнәһе, кеше, компьютер кеүек, яҡшы хәтерле булырға, автоматик рәүештә барлыҡ белемдәрҙе ҡуллана белергә тейеш. Быға тиклем ата-әсәһе ҡанаты аҫтында ел-ямғыр теймәй үҫкән бала үҙаллы тормош көтөүҙең беренсе һабаҡтарын студент булыу дәүерендә ала. Биш йыл буйы үҙләштергән теоретик белемен эш урыны табып, ғәмәлдә һынап ҡарарға теләүсе йәш белгестән эш стажы һорайсаҡтар. Студент нишләһен, ярҡлаша. Ярты-йорто уҡый, күп ваҡытын эшкә бүлә. Студент бишкә ярылһа ярылһын, тик ниндәйҙер талаптарға яуап бирерлек белгес булһын. Ә уҡып та, төндәрен йоҡламай эшләп тә йөрөгән кешенән ниндәй белгес сыҡһын? Был һорауға яуап юғары уҡыу йорттарын тамамлап та, алған белеме буйынса эш урыны таба алмай, икенсе профилдә үҙләштереп, йә иһә бөтөнләй ябай эшсе сифатында хеҙмәт юлы башлаусылар миҫалында асыҡ сағыла. Биш йыл ваҡытын, күпмелер сумма аҡсаһын әрәм итеп, юғары уҡыу йортонда белем алып, дипломлы маляр булғансы, ошо уҡ һөнәрҙе бер-нисә ай эсендә үҙләштереп, эшләп йөрөһә булманымы икән ни, тигән кеүегерәк һорауҙар ҙа тыуып ҡуя. Ә йәш кеше уҡырға ингән саҡта былай килеп сығырын ҡайҙан ғына белһен инде. Шулай ҙа уға йыл да билдәләнеп килгән иң абруйлы һәм кәрәкле һаналған һөнәрҙәр исемлегенә алдан уҡ күҙ һалып ҡуйыу ҡамасауламаҫ ине...

### Хеҙмәт баҙарына кемдәр кәрәк?

Башҡортостан Республикаһы Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн эшсе һөнәрҙәренә һорау ҙур. Эшсе ҡулдарға айырыуса ашкәртеү сәнәғәте, төҙөләш, күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, белем биреү учреждениелары мохтаж. Уларға ярҙамсы эшсе, ташсы, газ менән иретеп йәбештереүсе, йөк тейәүсе, балта оҫтаһы, бетон һалыусы, маляр-буяусы, һатыусы, урам һепереүсе, слесарь-сантехник, тегеүсе, киң профилле механизатор, икмәк бешереүсе, монтажсы, токарҙар етешмәй. Хеҙмәткәрҙәр араһында страховкалау агенттары, шәфҡәт туташтары, инженер-технолог, табип, инженер-конструктор, терапевт, балалар табибы, агроном, зоотехник, ветеринар, инженер-проектлаусылар талап ителә. Ә бына иҡтисадсы, бухгалтер, юрист, финанс эштәре белгесе, программист, менеджер, кассир, дәүләт һәм муниципаль идаралыҡ етәкселәре ҙур һорау менән файҙаланмай. Шулай уҡ һөнәрселек училищеларында бухгалтер, ПЭВМ операторы, ашнаҡсы, автомобиль транспорттарын ремонтлау буйынса слесарь һөнәрҙәрен үҙләштереүселәргә лә эш урыны табыу ауырға төшә. Статистиканан күренеүенсә, ябай эшсе һөнәрҙәре әле лә ҙур һорау менән файҙалана, әммә уларҙың йәштәр араһында популярлығы юҡ. Йәштәрҙә хеҙмәт баҙарында "артыҡ" һаналған һөнәрҙәр ҡыҙыҡһындыра. Шунлыҡтан да Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығына мөрәжәғәт итеүселәр араһында юрист, дизайнер, филолог, иҡтисадсылар күпселекте тәшкил итә.

Был нилектән шулай килеп сыға һуң? Ни өсөн алған һөнәре буйынса эш башларға теләмәгән йәш белгес бөтөнләй икенсе эш урыны табып урынлаша, быны менән ул шул һөнәрҙе үҙләштереүсенең урынын биләй, уныһы эш таба алмай йонсой һәм, үҙ сиратында, шулай уҡ икенсе берәүҙе эшһеҙ ҡалдыра. 2011 йылдың яртыһында ғына 16 йәштән 29 йәшкә тиклемгеләр араһында республика район һәм ҡалаларындағы эш менән тәьмин итеү үҙәктәренә мөрәжәғәт иткән ошо рәүешле эш таба алмаусылар һаны 26,5 меңгә еткән. Был барлыҡ эшһеҙҙәр һанының 38,3 процентын тәшкил итә. Июль өсөн статистика һөҙөмтәләре 7,3 мең йәш граждандың эш эҙләүен билдәләй, был иһә бөтә эшһеҙҙәрҙең 22 процентын тәшкил итә. Июлдә эш эҙләүсе йәштәр араһында быйыл ғына уҡыу йорттарын тамамлаусы 343 йәш белгес теркәлгән. Уларҙың 33 проценты - юғары белем алыусылар. Мәғлүмәттәргә Башҡортостан Республикаһы Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығының баш эксперт белгесе Әнисә Зөфәр ҡыҙы Төхвәтуллина аңлатма бирел, былай ти: "Мәктәпте тамамлаусы бала хеҙмәт баҙары тураһында аҙ мәғлүмәтле, шуға ла ул киләсәктә эшһеҙ ҡалмаҫ өсөн ниндәй һөнәр үҙләштерергә кәрәк булыуын белмәй. Быны эҙемтәһе - үрҙәге күрһәткестәр. Илебеҙҙәге эшһеҙлекте йәйлар өсөн, минеңсә, совет осорондағы системаны - дәүләт тарафынан эш урындары бүлеү, махсус заказ ярҙамында кадрҙар әҙерләүҙе кире ҡайтарырға кәрәктер. Ул ваҡытта инде артыҡ эш урыны ла, артыҡ эшсе лә булмаясаҡ. Бынан тыш, ябай эшсе һөнәрҙәренең статусын күтәреү өҫтөндә лә эшләргә кәрәк. Йәштәргә икмәк бешереүсе булмаһа, министрҙар ҙа, юристар ҙа булмаясаҡ икәнлеген төшөндөрөргә ине" .

Әнисә Зөфәр ҡыҙы әйтеүенсә, бөгөн Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенә мөрәжәғәт итеүселәргә эш урыны табырға ярҙамлашыу яйға һалынған. Уҡыу йортон тамамлағандан һуң бер йыл дауамында үҙәккә килеп теркәлеүсе йәштәрҙе ярты йыллыҡ стажировкаға ла йүнәлтәләр икән хатта. Әгәр ҙә инде йәш кеше был стажировканы үтеп тә, артабан эш таба алмай икән, ул саҡта әҙер вакансиялар буйынса эш урыны эҙләргә мөмкинлек бирелә. Стажировка үтеү осорона "әйрәнсеккә" дәүләт иҫәбенә тәжрибәле белгес беркетелергә мөмкин, уларҙың икеһенә лә минималь эш хаҡы түләнәсәк. Был программанан тыш, Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә вакансиялар йәрминкәһе, түңәрәк өҫтәлдәр, семинарҙар үткәрелеүе лә йәштәргә эш урыны табырға ярҙам итеүгә йүнәлтелгән. Әммә эшһеҙ ҡалыусыларҙың барыһы ла үҙәккә килеп теркәлергә ашыҡмай, үҙ йүндәрен үҙҙәре күрә. Йәиһә бөтөнләй эш эҙләмәй өйҙә ята, миҙгелле эштәр табып урынлаша. Ә бөгөнгә ярҙамсы эшсегә - 2521, ташсыға - 1171, газ менән иретеп йәбештереүсегә 672 вакантлы эш урыны барлығын иҫәпкә алмайҙар.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Кеше үҙ урынында эшләһен өсөн уны башта үҙләштергән һөнәре буйынса эш менән тәьмин итергә кәрәк. Илдәге эшһеҙлек тә бит тик иҡтисади факторҙарға ғына түгел, ә уҡыу-уҡытыу эштәренә лә, кешенең үҙ һөнәре буйынса эшләү-эшләмәүенә лә бәйләнгән. Бәлки, ысынлап та, хеҙмәт өлкәһендәге закондарға бер аҙ үҙгәрештәр индерергә кәрәктер? Шул саҡта мәктәптәрҙә тик балаларҙы яратҡан уҡытыусылар ғына эшләр, студент эш стажын уҡыу барышындағы практика ярҙамында тулыландырыр, ябай эшсе хеҙмәте хөрмәт ителер ине… Юҡ, юҡ, социализм түгел, ә, ниһайәт, тоторохло демократик тормош менән йәшәй башлар инек.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

## ИНТЕРНЕТТАН



# ШӘКӘРҘЕҢ...

## зыяны күберәк

■ Ҡояш төçөндәге цитрустар кәйефте күтәреү һәм йәшәртеү һәләтенә эйә. Улар араһында тәүге урынды әфлисун алып тора. Был емеш С витамины сығанағы - 180 г әфлисунда 70 мг аскорбин кислотаһы бар. Был кеше өсөн С витаминының көндәлек нормаһы. Ҡабығының ҡалын булыуы арҡаһында унда витаминдар оҙаҡ һаҡлана. Күп цитрус емештәрендә иммунитетты нығытыусы селен бар. Цитрустар - диетик продукт иҫәпләнә, сөнки улар түбән калориялы һәм матдәләр алышыныуҙы тиҙләтә. Уларҙың составындағы пектин шәкәр кимәлен контролдә тота. Бер нисә мандарин йәки әфлисун асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа ала.

■ Цинк - организм өсөн иң кәрәкле минералдарҙың береһе. Оло кешенең организмында цинк 2 г тирәһе һәм ул һөйәк һәм мускулдарға таралған. Әгәр ҙә цинк нормала икән, тире һәм сәстәр матур була, сөнки был минерал күҙәнәктәр яңырыуына булышлыҡ итә. Шулай уҡ цинк енси биҙҙәр, гипофиз һәм ашҡаҙан аҫты биҙҙәре эшен яйлай, тимәк, беҙҙең хәтеребеҙ, ҡандағы шәкәр кимәле һәм нәҫелебеҙҙе дауам итеү мөмкинлегебеҙ уға бәйләнгән. Составында цинк булған витамин өҫтәмәләре ҡабул итеү тәбиғи ҡартайыуға ҡаршы тора.

■ Кеше алкоголгә, никотинға ғына түгел, шәкәргә лә тиҙ күнегә икән. Белгестәр әйтеүенсә, татлы аҙыҡтар яратыусылар иртәрәк ҡартая ла. Принстон университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тәм-том яратыусыларҙың мейеһе әйләп башҡа етдиерәк наркотик препараттарҙы ҡабул итеүгә лә әҙер була. Ғалимдар белдереүенсә, бында домафин тигән ҡәнәғәтлек тойғолары биреүсе гормон ғәйепле. Шәкәр, алкоголь һәм башҡа наркотиктар кеүек үк, мейегә тап домафин рецепторҙары аша тәьҫир итә.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, Ер шарындағы 1,5 миллиард кешегә йод етешмәү сәбәпле, ҡалҡан биҙе сирҙәре менән ауырыу ҡурҡынысы янай. Быны булдырмау өсөн табиптар рационға диңгеҙ ылымыҡтарын индерергә тәҡдим итә. Япония ғалимдары раҫлауынса, был аҙыҡты даими ҡулланыу иммунитетты яҡшырта. Уның составындағы альгинаттар организмдан ауыр металдарҙы һәм радионуклидтарҙы сығарырға һәләтле. Германия һәм Һиндостанда үткәрелгән тикшеренеүҙәр диңгеҙ ылымығының матдәләр алышыныуға булышлыҡ итеүен дә асыҡлаған.

■ Сағыу төштәрҙе йыш күрәһегеҙме? Тимәк, һеҙҙең интеллект кимәлегеҙ бик юғары. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллекты юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас та уны иҫкә төшөрә алмауы тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйткән. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы деталләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

## МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Динебеҙ, уға ярашлы әхлаҡ, әҙәп төшөнсәләре менән ҡыҙыҡһыныусылар арабыҙҙа арта бара. Тимәк, һорауҙарға ваҡытында яуап биреү шулай уҡ изге эш. Был йәһәттән мосолман календарҙары, матбуғат баҫмаларындағы айырым рубрикалар, шулай уҡ телевидение һәм радиолағы тапшырыуҙар ихтыяжды ҡәнәғәтләндерергә тырыша. Ләкин дин - ул мәңгелек ғилем. Өйрәнгән һайын яңы һорауҙар ҡалҡып сығып ҡына тора. Йома намаҙҙарында хәҙрәттәрҙең вәғәздәре шулай уҡ олоһон да, кесеһен дә үҙенә йәлеп итә. Махсус белемле дин әһелдәре менән аралашыу дөрөҫ йәшәү, хаҡ юлдан китеүгә ныҡ ярҙам итә. Хатта миҙгелдәр алмашыныуы ла әҙәм балаһының тәртибе, үҙ-үҙен тотошо тураһында уйланырға саҡыра. Көндәлек тормошта ғына ла мең төрлө һорау тыуа. Быныһы ғаилә ағзалары, уларҙың бер-береһенә мөнәсәбәтенә нығыраҡ ҡағылалыр. Беҙ ошо ихтыяжды иҫәпкә алып, Ҡ. РАМАҘАНОВ хәҙрәттең вәғәзен тәҡдим итмәксебеҙ. Уйланғандар һәм иманға ынтылғандар өсөн, әлбиттә.**

# КҮҘҘӘРЕҢДЕ ХАРАМДАН ҺАҠЛА,

## йәғни ҡыҙ-ҡатындар ҡылығы тураһында



Иң оло бәхет килтерәсәк дөрөҫ һәм ғәҙел юлды - Ислам динен - беҙгә шәфәғәт иткән Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙарыбыҙ булһын! Беҙ дин зәғифләнгән осорҙа йәшәйбеҙ, кешеләр йөрәгендә тәкүәлек (ҡурҡыу) кәмене, күптәрҙең күңеле был донъяның ялтырауыҡтары һәм байлыҡтарына ғына талпына. Был хәл ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың тәртибендә, тотошонда ла сағылмай ҡалмай. Күп һылыуҙарыбыҙ көндәр йылыныу менән сисенә, ярым-яланғаслана башлай. Шуға ла дин әһелдәре үҙ вәғәздәрендә ғәүрәт (яланғас) урындарҙы ҡаплау, сит күҙҙәрҙән һаҡланыу кәрәклеге тураһында әйтергә мәжбүр. Беҙҙең заманда харамдан һаҡланыу күпкә ҡыйын. Был, әлбиттә, ауырлыҡҡа һылтанып, күҙгә ирек бирергә тейешбеҙ, тигәнде аңлатмай. Эйе, харамға күҙ атыуҙан тыйылыу еңел түгел, ләкин ауырлыҡҡа ярашлы, һәр кем ахирәттә сауабын да аласаҡ. Хәҙистә әйтелә: "Кисерелгән ауырлыҡтарға ярашлы әжере биреләсәк". Әйтәйек, кеше харамдан күҙен ун тапҡыр һаҡлаһа, ун тапҡыр әжер биреләсәк, харамға йөҙ йәки мең тапҡыр ҡарамаған кеше шул тиклем үк әжерен дә аласаҡ. Беҙгә ҡарашты йәшерергә Ҡөрьән-Кәрим ҡуша (яҡынса мәғәнәһе): "Әйт (Эй, Мөхәммәт (с.ғ.с.)!) иман килтергән ирҙәргә, улар үҙҙәренең күҙҙәрен һәм оят ерҙәрен харамдан һаҡлаһындар. Был - улар өсөн таҙараҡ. Шул хаҡ, Аллаһы Тәғәлә уларҙың нимә эшләгәнен белә. Шулай уҡ иман килтергән ҡатындарға әйт, улар үҙҙәренең күҙҙәрен һәм оят ерҙәрен харамдан һаҡлаһындар" ( "Ән-Нур", 30-31-се аяттар).

Табарани тапшырған хәҙистәрҙең береһендә шулай тиелә: "Өс төр күҙ Йәһәннәм утын күрмәйәсәк. Аллаһ юлын һаҡлап ғазауатта уяу торғандар; Аллаһтан ҡурҡып илаған күҙҙәр; һәм харамға ҡарауҙан тыйылған күҙҙәр". Күҙ - Хаҡ Тәғәлә биргән иң оло ниғмәт. Был ниғмәт өсөн беҙ Уға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Рәхмәтле булыу Хаҡ Тәғәлә уларҙы нимә өсөн яралтҡан - шуның өсөн файҙаланыу, тигәнде аңлата. Күҙ беҙгә донъялағы эштәрҙе эшләй алһын өсөн, мосолман ҡәрҙәштәребеҙгә риза булып ҡарар өсөн, Ҡөрьән, хәҙистәр, дини китаптар уҡыр, дин әһелдәрен, шәйехтәрҙе, яҡшы кешеләрҙе, Аллаһҡа яҡын торған әүлиәләрҙе күрер өсөн, үҙебеҙҙе уратҡан мөхитте күҙәтеп, Аллаһы Тәғәләнең хикмәтен һәм бөйөклөгән аңлар өсөн һәм ошо ниғмәттәре өсөн Хаҡ Тәғәләгә шөкөр итер өсөн бирелгән. Әгәр ҙә беҙ сит ҡатындарға ҡараһаҡ, мосолмандарҙың етешһеҙлектәрен генә күрһәк, тимәк, беҙ Уға ниғмәте өсөн шөкөр итә белмәгәндәрҙән буласаҡбыҙ. Ҡөрьәндә әйтелгән (яҡынса мәғәнәһе): "Әгәр ҙә һеҙ шөкөр итеүселәрҙән булһағыҙ, Мин, һис шикһеҙ, ниғмәттәремде арттырасаҡмын, әгәр ҙә залимдарҙан булһағыҙ, Минең язам бик ҡаты" ( "Ибраһим", 7-се аят).

Имам ал-Ғазали яҙа: "Һиңә ике сәбәпкә бәйле, күҙеңде харамдан йәшерергә кәрәк. Тәүгеһе: күҙҙәрең күргән бөтә нәмә лә һиненеке булмаясаҡ. Күреп тә уның һинеке булмаясағын белеп, үкенеүгә ҡарағанда, күҙҙе харамдан тыйыу күпкә еңелерәк. Фани донъяның харамына ҡарау һиңә зыян ғына итәсәк. Икенсе сәбәп: Аллаһы Тәғәлә һиңә күҙҙәрҙе был донъяла тәғәйенләнеше буйынса файҙаланырға бирҙе, ә ахирәттә - Аллаһы Тәғәләгә ҡарар өсөн. Әгәр ҙә фани донъяла харамға ҡарауҙан тыйылмаһаң, ошо оло ниғмәттән (Аллаһы Тәғәләне күреүҙән) мәхрүм ҡалыуың бар".

Харамға, белмәйенсә, аңғармаҫтан күҙ һалып алыу гонаһ түгел, ләкин ентекләп бағыу, оҙаҡ текәлеү, йәки ҡабаттан ҡарау гонаһҡа инә. Аллаһтың рәсүле (с.ғ.с.) әйткән: "Эй, Ғәли, йәннәттә һинең өсөн айырым хазина урыны бар. Харамға бер мәртәбә ҡарағандан һуң, икенсе тапҡыр күҙ һалма. Бер ҡараш ташлау - үҙең өсөн (гонаһ һаналмай), ә икенсе ҡабатлап ҡарау - үҙеңә зыян яһау (гонаһҡа инә)" (Әхмәд).

Харамға күҙ һалыу, иғтибар йүнәлтеү - динебеҙ өсөн ағыу. Ә күҙҙе харамдан һаҡлау иманды нығыта һәм Аллаһҡа ғибәҙәт итеү шатлығын кисерергә ярҙам итә. Аллаһтың рәсүле (с.ғ.с.): "Аллаһы Тәғәлә әйтә: "Харамға ҡарау - шайтандың ағыулы уҡтарының береһе. Кем дә кем Минән ҡурҡып, ҡарашын харамдан һаҡлай, мин уны (ҡарашты) иманға әйләндерермен, һәм ул кеше мотлаҡ имандың ләззәтен йөрәгендә тоясаҡ", тигән (Табрани, Хаким).

Имам Әхмәд һәм Табарани һөйләгән икенсе хәҙистә шулай тиелә: "Ҡатын кешенең зиннәтенә (аңғармаҫтан) күҙ һалып, шундуҡ (Аллаһтың ризалығы өсөн) ҡарашын йә-

✓ Ҡыйбатлы әйберҙе беҙ сейфта йәки һандыҡта бикләп тотабыҙ. Һеҙ ҙә үҙ зиннәттәрегеҙҙе хәләлдәрегеҙ өсөн генә һаҡлағыҙ. Матурлығығыҙҙы арзанайтылған тауар һымаҡ күргәҙмәгә сығармағыҙ.



шергән һәр мосолманға Аллаһы Тәғәлә был ғәмәле өсөн йөрәген ҡыуандырыр ғибәҙәт менән бүләкләйәсәк".

Асфахани тапшырған хәҙистә йәнә лә шулай тиелә: "Хөкөм көнөндә Аллаһ юлын һаҡлап уяу торғандарҙан һәм, Аллаһтан ҡурҡып, себен башы тиклем генә күҙ йәше ҡойғандарҙан тыш, иламаған бер генә күҙ ҙә ҡалмаясаҡ". Дин әһелдәренең күпселеге фекеренсә, шәриғәт ҡушмаһа, хатта ҡарт һәм йәмһеҙ сит ҡатынға ла ҡарау яҙыҡ һанала.

Аллаһы Тәғәлә кешегә зыян килтермәгән бөтә нәмәгә лә рөхсәт бирә. Харам бер ҡарағанда ҡәнәғәтлек, ләззәт биргән кеүек. Эйе, ул - хас та балға ҡушып болғатылған ағыу. Ауыр һымаҡ күренгән нәмәләр менән һынамаһа, беҙҙе Аллаһы Тәғәлә нимә менән һынар ине һуң? Әгәр ҙә харамдан тыйылмаһаҡ, нисек итеп беҙ үҙебеҙҙе Аллаһтың хаҡ ҡолдары тип раҫлай алабыҙ? Аллаһы Тәғәлә беҙҙе бар итеүсе, беҙ Уның мәхлүктәре. Беҙ: "Ни өсөн, нимәгә ул?" - тигәнерәк һорауҙар ҡуймайынса, бер һүҙһеҙ, Уға буйһонорға тейешбеҙ. Гонаһ ҡылабыҙ икән, быны танып, тәүбәгә килеп, Хаҡ Тәғәләнән ярлыҡау һорарға тейешбеҙ.

Был үтенесте мөъминә ҡыҙ туғандарға еткермәксемен. Аллаһы Тәғәлә иман биреп, Һеҙҙе ҙурланы һәм һеҙ йәннәткә инергә өмөт итәһегеҙ. Шуға ла үҙегеҙҙе Көнбайыштағы ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар кеүек тотмағыҙ, сөнки улар үҙҙәренең киләсәген ҡартайыу һәм был донъялағы үлем, тип кенә ҡарай, киләсәктә бүтән бер нәмәгә лә өмөт итмәй. Аҡылы һәм иманы булған лайыҡлы ирҙәр һеҙгә былай ҙа хөрмәт менән ҡарай. Ҡыйбатлы әйберҙе беҙ сейфта йәки һандыҡта бикләп тотабыҙ. Һеҙ ҙә үҙ зиннәттәрегеҙҙе хәләлдәрегеҙ өсөн генә һаҡлағыҙ. Матурлығығыҙҙы арзанайтылған тауар һымаҡ күргәҙмәгә сығармағыҙ.

Хөрмәтле мосолман ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ! Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе Исламды таратыу өсөн һәм Исламға ярашлы, татыу, өлгөлө ғаилә булдырһын өсөн, тәрбиәле балалар үҫтерһен өсөн яралтҡан, ә аҙғынлыҡ өсөн түгел. Шуға ла: "Шайтан һәм уның фекерҙәштәре - динһеҙҙәр беҙҙе Ислам динен эстән тарҡатыр өсөн файҙаланмаймы?" - тигән һорауҙы ла үҙегеҙгә бирергә онотмағыҙ. Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан юлдан барыу - ике донъя бәхете өсөн дә сәбәпсе бит. Һәр ҡушылғанды үтәй алмағанда ла, хәлегеҙҙән килгәнен эшләргә тырышығыҙ. Улай ҙа килеп сыҡмаһа, ниәт булһа ла әйтегеҙ. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте киң, өмөттө юғалтмағыҙ. Ҡылған гонаһтары өсөн үкенгәндәр - уларҙы ҡылмағандарға бәрәбәр. Аллаһы Тәғәлә тәүбәгә килгәндәрҙе ярата. Ысын күңелдән тәүбә иткәндәрҙең гонаһын Аллаһы Тәғәлә яҡшылыҡ менән алмаштыра.

Сабырлыҡ арҡаһында һеҙ Йәннәт солтаншалары, батшабикәләре булыу мөмкинлегенә эйәһегеҙ. Ислам китаптарында шулай тип яҙылған: "Хәленән килгәнсә дин талаптарын үтәгән, үҙҙәренең сафлығын, намыҫын һаҡлаған, ят ҡараштарҙан тәнен һаҡлаған мосолман ҡыҙҙары Йәннәттәге хур ҡыҙҙарынан етмеш тапҡыр яҡшыраҡ". Бына шуға ла ике донъяға рәхмәт итеп ебәрелгән Аллаһы Тәғәләнең һөйөклө рәсүле Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) әйткәндәре һеҙҙе уйландырһын: "Йәннәт әһелдәренән булған хур ҡыҙы был донъяла күренгән булһа, ул үҙенең хуш еҫе һәм балҡышы менән көнбайыш һәм көнсығыштағы бөтөн арауыҡты яҡтыртыр ине. Аллаһ менән ант итәм, хур ҡыҙының баш кейеме тотош ошо фани донъянан һәм уның эсендәге барлыҡ нәмәнән дә яҡшыраҡ" (Аль-Бухари, Мөслим, Табарани). Тимәк, иманлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уларҙан өҫтөн буласаҡ.

Әлеге мәлдә күп мосолман ирҙәре йәй етеү менән ҡатындарына ғәүрәт урындарын күрһәтеп йөрөргә рөхсәт итә. Мосолман ирҙәре был турала ҡатындары, һеңлеләре, ҡыҙҙары менән һөйләшергә тейеш. Хәҙерге заман ирҙәрендә үҙҙәренең ҡатындарына тейешле дәрәжәләге элек маҡталған көнләшеү тойғоһо кәмене. Мин быны ыҙғышырға, ғауғалашырға кәрәк, тигәндән әйтмәйем. Ләкин өгөтләү, аҡыллы, яҡшы һүҙ менән аңғартыу, кәрәк икән ҡатыраҡ итеп тә әйтеү, дәлилләп аңлатыу артыҡ булмаҫ ине. Хатта ире тыймаған хәлдә лә иманға, Исламға, Хаҡ Тәғәләгә, бәйғәмбәребеҙ Мөхәмәткә (с.ғ.с.) булған һөйөү ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға үҙҙәренең ғәүрәт урындарын ҡапларға мәжбүр итергә тейеш.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әҙерләне.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Һабаҡтар тураһында

**Хәҙер һеҙ ауырыуҙың сәбәптәре - ауралағы бысраҡ энергетика икәнлеген беләһегеҙ. Ә аураның бысраҡ булыуы насар уйҙарға, кире кисерештәргә һәм ғәмәлдәргә бәйле. Ябай ауырыуҙар менән сирләп, беҙ кире энергияны яндырыбыҙ һәм һауығабыҙ. Хроник ауырыуҙар ваҡытында даими яныу һәм яңы стрестарҙың тупланыуы барлыҡҡа килә, был һауығырға мөмкинлек бирмәй. Шул уҡ ваҡытта, ауырыу - һабаҡ, унан һабаҡ алып, аҡыллыраҡ булырға һәм ауырыу сәбәптәрен асыҡларға кәрәк.**

Насар уйҙар, кисерештәр - улар кире энергия ҡуйырығы, ә нисек итеп насар ғәмәл кешенең яҙмышына һәм сәләмәтлегенә йоғонто яһай ала? Әйҙәгеҙ, аңларға тырышайыҡ. Мәҫәлән, кеше бурысын ҡайтармай һәм бында уның яҙмышының, сәләмәтлегенең ниндәй ҡыҫылышы булыуы мөмкин? Барыһы ла бик ябай: уны ваҡыты-ваҡыты менән иҫкә аласаҡтар, ғәйепләйәсәктәр, һөйләйәсәктәр (бәлки, рәнйейәсәктәр), йәғни ул даими энергетик һөжүмгә дусар буласаҡ. Шул ваҡытта уның аураһында боҙом барлыҡҡа киләсәк. Бынан тыш, сағылыш ҡануны буйынса, уның финанс проблемалары башланасаҡ. Һуңынан кеше ни өсөн уға уңыш йылмаймағанға, ни өсөн барыһы ла шулай бик насар булғанға аптырай. Ә ваҡиғаларҙы сағыштырып, үҙенең бәхетһеҙлегенең сәбәптәрен асыҡларға хәленән килмәй.

Ә боҙомдо алып ташлап буламы? Эйе, мөмкин! Әммә ни мәғәнә - уның тураһында ҡабат-ҡабат уйлаясаҡтар, бурыслының ҡабат aураһы боҙоласаҡ, тағы ла проблемалары тыуасаҡ. Һәм ул тағы боҙомдо алырға йүгерәсәк. Кешегә аҡса кәрәк булған һайын, ул бурыс ҡайтармаусыны иҫенә төшөрәсәк! Шуға күрә бурыслы кешегә бәхетһеҙлек һәм проблемалар сылбырын өҙөү өсөн уларҙың сәбәбен асыҡларға, бурысын ҡайтарырға, ғәфү үтенергә кәрәк - һәм барыһы ла яҡшырыр.

Шуға күрә ваҡиғаларҙы сағыштырып ҡарарға өйрәнергә - осраҡлы ғына бер нәмә лә булмай, шуны аңлап, яҙмыш ебәргән һабаҡтарҙы ҡабул итергә кәрәк. Алдаҡ бергә тупланып, үҙенә кире ҡайта: әгәр уның алдағы кемгәлер матди зыян килтерһә, кешенең матди проблемалары башлана, кемдеңдер сәләмәтлегенә зыян килһә, үҙе лә сәләмәтлеген юғалтыуы мөмкин.

Был осраҡта кеше һабаҡ ала: алданың - үҙеңде лә алдаясаҡтар! Кешене хатта шаяртып ҡына ла алдарға ярамай (насар шаяртырға ярамай).

Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ һабаҡ ала, уларҙы рәхмәтле булып ҡабул итергә, аңларға һәм барлыҡ проблемаларҙың сәбәбен бөтөрөү зарур.

Бәхетле булыу өсөн тирә-яҡ мөхит менән гармонияла йәшәргә кәрәк!

"Барығыҙға ла бәхет теләйем!" тигән матур аффирмация бар. Уны көн дауамында ысын күңелдән, дөйөм алғанда 45 минут шыбырлап ҡына ҡабатлаһаң, теләһә ниндәй ауырыуҙан да ҡотолорға мөмкин. Хатта онкологиянан да дауаланған осраҡтар бар!

Барыһына ла бәхет теләгәндә, сағылыш ҡануны буйынса беҙгә лә бәхет теләйҙәр!

Кешенең сире, физик ғазапланыуы - ул гармония боҙолоуы һөҙөмтәһендә негатив энергияның сик һыҙатынан үтеүе, шул арҡала организм тигеҙлегенән сыға һәм тән ауырый башлай. Ҡабаттан гармонияға эйә булыу өсөн ауырыу һәм ғазапланыу сәбәптәрен бөтөрөргә кәрәк була.

Ауыртыуҙы баҫа торған саралар ярҙамында ауыртыу сигналын баҫыу патологияны тәрәнәйтә генә. Организм, кеше, ниһәйәт, кире энергия сығанағын юҡ итһен өсөн ауырыуҙы көсәйтергә мәжбүр була.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аң һәм тән бәйләнеше

Аңдың тән күҙәнәктәренә йоғонтоһо тиҫтәләрсә йылдар ныҡлы өйрәнелде, әммә был бәйләнеште микроскоп ярҙамында асыҡлап булмай. Бәлки, киләсәктә быға телескоп ярҙам итер, сөнки Клив Бакстер был "беренсел ҡабул итеү" химик реакциялар йәки нервылар импульстарына нигеҙләнмәгән, ә Йыһан тәбиғәтенә һалынған, тип раҫлай. Бындай ҡараш яңы түгел.

Бынан йөҙҙәрсә йылдар элек Австралия актеры Маттиас Александер үҙенең һөйәктәре менән уйында ғына һөйләшеп, сәхнә теле проблемаларынан ҡотола. Ул: "Муйыным еңел борола, башым өҫкә лә аҫҡа ла йөрөй, арҡам турая һәм борола", - тип ҡабатлай. Шунан башлап Александер ысулын ҡулланып, күп уҡытыусылар донъяның төрлө төбәктәрендә "дауалап булмаған" кешеләргә ярҙам итә.

Был ысул гипноз, үҙ-үҙеңде ышандырыу һәм Фелденкрайс, Симонтон, Сильва кеүек аң менән тән араһындағы бәйләнеште камиллаштырыу менән шөғөлләнгән сағыу шәхестәр аша киң танылыу тапты. Мойше Фелденкрайс был өлкәгә "Хәрәкәт аша аңлау" эше менән өлөш индерә. Был хеҙмәттә психик һәм физик процестар берләштерелә. Карл Симонтон яман шеш ауырыуҙарын хатта "дауалап булмаған" осраҡтарҙа ла ремиссия мәсьәләләрендә ысын квант һикереүе яһай: ул ауырыуҙарға көсөргәнештән арынырға ла ҡан күҙәнәктәренең яман шеш менән көрәштә еңеп сығыуын күҙалларға тәҡдим иткән. Фәндә уның методикаһы "психонейроиммунология" атамаһын ала. Хосе Сильва хәҙер "Сильва ысулы" тип аталған аң менән идара итеү ысулын эшләй. Ул төрлө илдәрҙәге миллионлаған кешене насар ғәҙәттәрҙән арыныу, тәндең ағзалары һәм системалары эшен нормаллаштереү, ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү һәм бихисап мөғжизәле һәләттәр алыуға килтергән көсөргәнештән арынған альфа-торошҡа инергә өйрәтә.

Бөгөн "психонейроиммунология" атамаһы "киберфизиология" термины менән алмашынды, сөнки дауалау тураһындағы фән аң һәм тәндең үҙ-ара бәйләнешен аңланы, атап әйткәндә, уның иммун системаһы менән генә сикләнмәүен, ә организмдың һәр күҙәнәгенә таралыуын асыҡланы. Бөтөн күҙәнәктәр, туҡымалар һәм ағзалар аңдың бойороҡтарын "ишетә". Был йүнәлештең һөҙөмтәләрен йомғаҡлап, киберфизиологияның мөһим мәлдәрен тәҡдим итәм.

Көсөргәнештән арыныу ғәҙәттәгесә башҡарыла. Уйығыҙҙа ғына тәнегеҙҙең һеҙҙе борсоған урынын күҙ алдына килтерегеҙ. Уның менән матур итеп һөйләшегеҙ, уның "төҙәлеүен" һорағыҙ. Уның нисек яуап "биреүен" тыңлағыҙ. Һуңынан был участканы сәләмәт тип күҙ алдына килтерегеҙ.

Уңышығыҙға ярҙам итәсәк бер нисә кәңәш:

- артыҡ уйламағыҙ - эшләгеҙ һәм һөҙөмтә көтөгөҙ;
- күҙәнәктәрегеҙгә ҡәтғи бойороҡтар бирмәгеҙ, дошмандарса мөнәсәбәттәрҙән ҡасығыҙ, улар бит беҙҙең дуҫтар;
- "сығышығыҙҙы" алдан әҙерләмәгеҙ - һүҙҙәр спонтан, иркә һәм ихлас булһын;
- мотлаҡ тәрән көсһөҙләнеү үткәрегеҙ, кәрәк икән, кирегә һанау ысулын ҡулланығыҙ;
- уйығыҙҙағы картиналарҙы файҙаланығыҙ: уны нисегерәк күҙ алдына килтереү мөһим түгел, аң "кем" тураһында һүҙ барғанын үҙе аңлар.

Һеҙҙең табибығыҙҙың киберфизиология менән таныш булмауы ла ихтимал. Әммә аң һәм тән һеҙҙеке һәм уларҙы дауланыуға ғына түгел, профилактикаға ла йүнәлтеп була. Киберфизиология медицина дауалауын алыштырмай, әммә уға ярҙам итә.

**Роберт СТОУН.**



## 29 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе". Сериал
22.30 "Товарищи полицейские". "Джентльмены неудачи", 1-я серия. Сериал
23.25 "Иван Охлобыстин. Поп-звезда"
00.30 Ночные новости
00.50 "Шакал"
03.00 Новости
03.05 "Идиократия"
04.25 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 127-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 155-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 232-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Каменская-6". "Черный список". Сериал
22.50 "Тайны следствия". "Заложники". Сериал
23.50 "Черный август. Дефолт"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Константа". Драма
04.10 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть". Док. фильм
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Мы объявляем вам войну". Сериал
00.30 "В зоне особого риска"
01.05 "Собственная гордость"
02.00 "До суда"
03.00 "Проклятый рай-2". Сериал
04.55 "Петля"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр" представляет"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 Киностудия "Башкортостан" представляет…**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости"**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Старинные мунажаты"**
**17.15 "Тэмле"**
**19.00 Хоккей. Ретроспектива золотого сезона ХК "Салават Юлаев"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.30 Художественный фильм**

## 30 АВГУСТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
10.15 "Модный приговор"
11.20 "Ураза-байрам". Трансляция из Уфимской Соборной мечети
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе". Сериал
22.30 "Товарищи полицейские". "Третий", 2-я серия
23.25 "Моя мама - Диана". Док. фильм
00.20 Ночные новости
00.45 "По ту сторону кровати". Комедия
02.25, 03.05 "Маленькие женщины"
03.00 Новости
04.25 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Кулагин и партнеры"
10.05 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 Праздник "Ураза-байрам"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 128-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 156-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 233-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Каменская-6". Сериал
22.50 "Тайны следствия". Сериал
23.50 "Рейс 007. Пассажирский разведывательный"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Честный детектив"
02.55 "Горячая десятка"
04.00 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Сериал
20.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Мы объявляем вам войну", 2-я серия
00.35 "Советские биографии. Анастас Микоян"
01.30 "Кулинарный поединок"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.05 "Проклятый рай-2"
04.55 "Петля". Сериал

### БСТ
**07.00 "В мире светлых звуков"**
**07.15, 23.45 Художественный фильм**
**09.00 "Ураза-байрам"**
**10.00 "Праздник веры и добра". Концерт**
**10.30 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.30 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.45 "Радуга над деревней"**
**15.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". Гора новостей и др."**
**16.15 Концерт. Поет Р. Масалимова**
**17.15 "Историческая среда"**
**17.45 "Полезные новости"**
**19.00 Гала-концерт детского конкурса "Байык-2011"**
**22.00 "Позабытый пригород"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**

## 31 АВГУСТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе", 3-я серия
22.30 "Товарищи полицейские". "Нестандартное решение"
23.25 "Среда обитания"
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Король Артур". Историческая драма
03.00 "Новости"
03.05 "Рождество с неудачниками"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 129-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Институт благородных девиц", 234-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Возвращение домой". Сериал
22.50 "Тайны следствия". Сериал
23.50 "Последняя командировка. Памяти Виктора Ногина и Геннадия Куринного"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Прогулка"
04.05 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
19.30 "Морские дьяволы-4". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение"
23.15 "Сегодня"
23.35 "Мы объявляем вам войну". Сериал
00.35 "Советские биографии. Екатерина Фурцева"
01.35 "Квартирный вопрос"
02.35 "Один день. Новая версия"
02.45 "Антиснайпер. Новый уровень"
03.05 "Проклятый рай-2"
04.55 "Петля"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др."**
**16.15 "Формат Уфа-2011". Фестиваль современной хореографии**
**17.15 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**19.00 "Хоккей"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Глас закона"**
**23.15 Художественный фильм**

## 1 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе", 4-я серия
22.30 "Товарищи полицейские". "Ночь любви", 4-я серия
23.30 "Человек и закон"
00.30 "Ночные новости"
00.55 "Кадиллак Рекордс"
03.00 "Новости"
03.05 "В эту игру могут играть трое"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 130-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Институт благородных девиц", 235-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Возвращение домой". Сериал
22.50 "Исторический процесс". Авторская программа Николая Сванидзе и Сергея Кургиняна
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
02.00 "Смертельные преследователи". Вестерн
04.10 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение"
23.15 "Сегодня"
23.35 "Мы объявляем вам войну", 4-я, закл. серия
00.35 "Советские биографии. Никита Хрущев"
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.05 "Проклятый рай-2"
04.55 "Петля"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.15 "Школьные годы чудесные…" Концерт**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорттар"**
**13.30 "Волшебный курай"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**14.55 Кубок Президента РБ по хоккею. "Металлург" (Магнитогорск) - "Нефтехимик" (Нижнекамск)**
**17.30 "Взгляд без слов. Неактуальные репортажи"**
**18.45 Кубок Президента РБ по хоккею. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Югра" (Ханты-Мансийск)**
**23.00 "Пятый угол". Диспут-клуб**
**23.45 Художественный фильм**

## 2 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.25 "Ни бе ни ме нехило"
22.00 Футбол. Отборочный матч Чемпионата Европы 2012. Сборная России - сборная Македонии (в перерыве - "Время")
00.00 "Выкрутасы". Комедия
01.50 "Красавчик-2". Комедия
04.10 "Жизнь"
05.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тяжелая нефть". Ко Дню работников нефтяной и газовой промышленности
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Евросинья. Продолжение". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 159-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 236-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2011"
22.50 "Ищу тебя". Мелодрама
00.40 "Отпетые мошенники". Комедия
02.55 "Лак для волос"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Сериал
21.30 "Дэн". Детектив
23.30 "СССР. Крах империи"
00.30 "Елизавета. Золотой век". Историческая драма
02.40 "Проклятый рай-2"
04.35 "Петля"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 Киностудия "Башкортостан" представляет…**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**14.55, 18.55 Кубок Президента РБ по хоккею**
**17.15 "Йома"**
**21.15 "Криминальный спектр"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.45 Художественный фильм**

## 3 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Ну, погоди!"
06.35 "Тегеран-43"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Алла Пугачева. Жизнь после шоу"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.15 "Евгений Леонов. Страх одиночества"
14.20 "Осенний марафон". Драма
16.05 "Иван Охлобыстин. Поп-звезда"
17.10 "Выкрутасы". Комедия
19.00 Большие олимпийские гонки
21.00 "Время"
21.15 "Призрак оперы"
22.25 "Хэнкок". Фантастический боевик
00.05 "Добро пожаловать в Лэйквью!"
02.10 "8 миля"
04.10 "Жизнь"
05.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.20 "Гусарская баллада"
07.15 "Вся Россия"
07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Специальный репортаж"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Сыщик самоваров". "Дождь". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Сыщик самоваров". "Пост". Продолжение
16.30 "Субботний вечер"
18.20 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.25 "Печали-радости надежды". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Печали-радости надежды". Продолжение
23.55 "Любовь по правилам... и без". Романтическая комедия
02.35 "Американские молнии"
04.45 "Комната смеха"

### НТВ
05.35 "Еще не вечер". "Опасные игрушки"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: Розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Адвокат". "Мертвая натура". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.20 "Таинственная Россия"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.45 "Последнее слово"
00.20 "Хозяин". Криминальная драма
02.20 "Скорая помощь"
04.10 "Один день. Новая версия"
04.40 "Алтарь Победы. Оружие победителей"

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.15 Фильм - детям**
**10.00 "Седьмое лето Сюмбель"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**12.55 Кубок Президента РБ по хоккею. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Югра" (Ханты-Мансийск)**
**15.15 "Дарю песню"**
**16.55 Кубок Президента РБ по хоккею. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). Прямая трансляция**
**19.30 "Еду я в деревню"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**21.15 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Замандаштар"**
**23.15 "Муз-базар"**
**23.45 Художественный фильм**

## 4 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Ну, погоди!"
06.25 "Тегеран-43"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Светлана Крючкова. "Я научилась просто, мудро жить..."
13.10 "Большая перемена", 4 серии. Лирическая комедия
18.05 "Нонна Гришаева. "Я из Одессы, здрасьте!"
19.10 "Минута славы. Мечты сбываются!"
16.10 "Анна и король". Историческая драма
18.50 Творческий вечер Игоря Матвиенко
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Давай, Нонна!"
22.30 "Большая разница"
23.35 "Двадцать одно". Криминальная драма
01.50 "Кто была та леди?"
04.00 "Жизнь"

### РОССИЯ 1
05.40 "Длинное, длинное дело". Криминальная драма
07.35 "Сам себе режиссер"
08.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.55 "Утренняя почта"
09.35 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Сыщик самоваров". "Богема"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Сыщик самоваров". "Жара". Продолжение
15.50 "Смеяться разрешается"
18.00 "Подруги". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Арифметика подлости". Мелодрама
22.55 "Властелин колец: возвращение короля". Фэнтези
03.00 "Венок из ромашек"

### НТВ
05.40 "Еще не вечер". "За все заплачено". Сериал
07.25 "В зоне особого риска"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Адвокат". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Наталья Гундарева. Личная жизнь актрисы". Док. фильм
23.00 "НТВшники"
00.10 "Беги без оглядки". Остросюжетный фильм
01.55 "Скорая помощь"
04.25 "Один день. Новая версия"
05.00 "Алтарь Победы. Помнить себя"

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Миссия кашмир"**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 Документальный фильм**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Забытые войны"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм**

КӨН ҠАҘАҒЫ



**Ошо көндәрҙә, Рәсәй үҙенең яңы тарихындағы бер ваҡиғаның егерме йыллығын билдәләгәндә, боронғо греттарҙан һаҡланып ҡалған бик матур риүәйәт иҫкә төштө. Сыҫҡан, үҙенең йәберләнеп йәшәүенән туйып, Аллаһҡа: "Миңә ҡанат бир, исмаһам, яуыздарҙан һауаға осоп ҡотолормон", - тип ялбарған. Йәлләп, Аллаһ уға ҡанаттар биргән. Шунан бирле сыҫҡан өсөн яңы тормош башланған. Әммә оса алыу һәләте яңы ҡаршылыҡтар килтергән. Башҡа һөтимәрҙәр уны үҙенеке итмәй, ситләтә башлаған. Ҡоштар ҙа уны үҙ араһына алырға теләмәй, ситкә типкән. Шунан бирле ярғанат башҡаларҙың күҙенә күренмәҫ өсөн көндөҙ ышыҡта йәшеренеп эленеп тороп, төндә генә осоп, бөжәк аулап, ҡан эсеп ғүмер итә, ти. Ошо ғибрәтле хәлдә Рәсәйҙә үткән путчтың егерме йыллығына бәйле иҫкә төшөрҙөм...**

# ЯРҒАНАТ...

## сыҫҡанмы, ҡошмо?

...Телевизорҙан көнө буйы "Аҡҡоштар күле" балетын тапшырҙылар. Һуңыраҡ ГКЧП ағзалары үҙҙәренең матбуғат конференцияһын үткәрә башланы. Жанр ҡанундары буйынса, ундай саралар берәй уңышлы эштән һуң ғына үткәрелә. Ә былар енеүселәргә һис тә оҡшамаған, ҡулдары ҡалтырай. Күренеп тора: үҙ теләктәре менән сыҡмаған былар бөтә донъя алдына...

Кискә табан әҙерәк аңлашыла башланы: путч! Бола ла түгел, фетнә лә түгел, ә путч. Был немец һүҙе ҡапыл ғына Советтар Союзында йәшәгән халыҡтар телендә иң популярға әүерелде лә ҡуйҙы. Шунан Ельциндың танк өҫтөндә сығыш яһауы, Горбачевтың Форостан самолет менән аҡ ҡына кейемдәрҙә ҡайтып төшөүе, бөтә донъя алдында СССР-ҙы таратыу спектакле, Рәсәй парламентының танктарҙан атылыуы... Һәр хәлдә, былар Рәсәйҙең яңы тарихындағы серле ваҡиғалар булып ҡалды һәм егерме йыл инде халыҡ ошо хаҡтағы һорауҙарына яуап эҙләй.

Михаил Горбачевтың ошо көндәрҙә: "ГКЧП ағзалары ахмаҡ, ә беҙ, шул иҫәптән мин дә - яртаҡыл булғанбыҙ", - тип әйтеүе лә хәлгә асыҡлыҡ индермәй. Баҡтиһәң, АҠШ президенты Джордж Буш путч буласағы тураһында Горбачевты ике ай элек үк иҫкәрткән булған икән. Ул саҡта Борис Ельциндың уң ҡулы булған матбуғат министры Михаил Полтораниндың, был путчты Горбачев менән Ельцин бергә ойошторҙо, тигәне, бәлки, дөрөҫкә тарталыр. Илдә башлаған үҙгәртеп ҡороуҙар һәләкәткә әүерелә башлағас, Горбачевтың үҙ власын һаҡлап ҡалыу өсөн Коммунистар партияһын ҡорбан итеүе, быны ГКЧП һәм Ельцин ҡулы менән атҡарырға маташыуы һәм путчты ойоштороуы тураһында күп сәйәсмәндәр раҫлай хәҙер. Тик һуңғы мәлдә Ельцин Горбачевты һемәйтә: тәхеткә үҙе менеп ултыра. Бигерәк тә милли республикаларҙа үҙен СССР президенты итеп һайламаясаҡтарын белә Борис Николаевич һәм бөйөк советтар дәүләтен тарҡатыуға төүге аҙымды яһай...

Донъя картаһында яңы дәүләттәр барлыҡҡа килде. Рәсәй яңы дәүләт символикаһын, шул иҫәптән теге ярғанатҡа оҡшаған ике башлы бөркөт һынлы гербты ҡабул итте. Шунан башланып китте Рәсәй тарихындағы ярғанат яҙмышы. Исем өсөн генә Рәсәйҙе G8 ("Ҙур һигеҙ") ойошмаһына ҡабул иттеләр, Ельцинды Коль, Мейджор, Буш кеүек "дуҫтар" үҙҙәренең йыйылыштарына "ҡәҙерле ҡунаҡ" итеп саҡырҙылар ҙа, донъяуи мәсьәләләрҙе унһыҙ ғына хәл иттеләр. Ә ВТО-ға барлы-юҡлы сәбәптәр табып, һаман да ҡабул итмәй йөҙәтәләр. Рәсәй етәкселәре, беҙгә ВТО-ның кәрәге лә юҡ, тигәнерәк һүҙ ҙә ысҡындырғылап ҡуя хәҙер. Халыҡты демократия тигән һүҙ менән алдаштырыу дауам итә. Демократияның йөкмәткеһе - халыҡҡа үҙенә тейешле власть органдарын һайлау мөмкинлеге булдырыу. Әммә хәҙер Рәсәйҙә һайлау тигән нәмә юҡ тиерлек. Уның урынына алдан билдәләнгән кандидаттарҙы тейешле тауыштар менән тәьмин итеү процедураһы урын алды. Ә тауышты һатып та, алдап та, тартып та алырға була. Баҙар иҡтисады ҡанундары барыһын да рөхсәт итә. Бына хәҙер яңы продуктты - "праймериз" уҙләштерәләр. "Берҙәм Рәсәй" үткәргән был сара тураһында ВЦИОМ мәғлүмәттәре буйынса тик 3 процент ҡына кеше ишетеп белә. Ә кешенең 93 проценты праймериздың нимә икәнен дә белмәй.

Вәғәҙә ителгән баҙар иҡтисады урынына Рәсәй халҡы мутант булған ярым коррупцион, ярым монополистик, етештереү урынына алып-һатыу менән шөғөлләнеүҙе хуп күргән "хужалыҡ" булдырҙы. Донъяның бер генә дәүләте лә Рәсәйҙә баҙар иҡтисады урынлашҡан тип әйтә алмай. Былдай яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыу еңелдән түгелдер, күрәһең. Баҙар иҡтисады урынына ҡырағай капитализм пәйҙә булды. НТВ-нан миллиардер Сергей Веременконың (онотһағыҙ, заманында Рәлиф Сафин менән бергә республика президенты булырға маташты) донъяһын күрһәтәләр. Алтын унитазы бар, Европалағы иң ҙур йылҡы өйөрө, Тверь өлкәһенең бөтә ере тиерлек уның ҡулында икән. Үҙенең фекер йөрөтөү генәһе мәктәп уҡыусыһыныҡы кеүек кенә. Ярай әле, беҙҙең президент булып китмәгән...

Ярғанат яҙмышын кисерә бөгөнгө Рәсәй. Был хәл бөтә өлкәлә лә хөкөм һөрә. Мәҫәлән, милицияны полицияға алмаштырыу ғына ла дәүләт ҡаҙнаһынан әллә нисә миллиардлыҡ сығым талап итте. Ә был сараның кәрәкме, түгелме икәнен халыҡҡа аңлатып та маташманылар. Медицина менән мәғариф өлкәһе лә шул уҡ хәлдә кисерә: советтар заманындағы һымаҡ булшай ҡалдырырғамы, әллә түләүле итергәме? Был һорауҙарға ил етәкселәренең аныҡ ҡына яуабы юҡ. Ярғанат ҡыланышы (сыҫҡан булып ҡалырғамы, әллә ҡош булып осорғамы?) бөгөнгө Рәсәй дәүләтендә фәнгә нигеҙләнгән төплө сәйәсәт алып барырға ныҡ ҡамасаулай. Аптыраған өйрәк арты менән күлгә сума, тигәндәй, хәҙер хеҙмәт кенәгәләренән баш тартырға булып киттеләр. Хеҙмәт кенәгәһенең илдәге тормош яҡшыға үҙгәрмәүендә ни ғәйебе бар икән? Был бит реформа йораты ғына. Иғтибарлы кеше өйрәнгән инде: һайлауҙар алдынан шундай ваҡ-төйәк мәсьәләләрҙе халыҡҡа "мөйнәргә" ташлайҙар, бәлки, башҡа мөһим проблемаларҙы күрмәҫтәр, тиҙәрҙер инде...

Хоҡуҡи дәүләт төҙөйбөҙ тигән булып, иҡдисадты үҫтереүгә тейешле законлар етешмәү һылтауы менән, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә генә ике меңләп (!) федераль закон ҡабул итеп ташланылар (Дәүләт Думаһы конвейерға әйләнде). Ул тиклем закондарҙы ябай кешегә генә түгел, юристарға ла үҙләштереү ҡыйынға тура килә. Шунлыҡта, ҡабул ителгән закондар эшләмәй. Бына әле Голикова етәкләгән министрлыҡ тәмәке тартыуҙы кәметеү маҡсатында бик ҡаты закон проекты әҙерләгән, тип яу һалалар. Һүҙ юҡ, проект бик шәп. Тик шунда ла күңелдә нигеҙле хәүеф бар: "бала" мутант булып тыуасаҡ! Тәмәке фирмаларының лоббистары беренсе сиратта был министрлыҡ хеҙмәткәрҙәрен, шунан ҡала хөкүмәтте һәм Дума депутаттарын тейешле рәүештә "эшкәртеп", законды үҙ файҙаһына борасағы көн кеүек асыҡ...

Ошо метаморфозалар тураһында уйланһаң, хәтирәләр мотлаҡ 1991 йылдың августында булған (булмаған) путчҡа алып ҡайта. Шул көндәрҙә һалындымы Рәсәйҙең "ярғанат" киләсәге? Тик бер һорау һаман да борсой: кем булды икән яңы тыуған йән эйәһенә шундай ҡанат биргән "алла" - Горбачевмы, Ельцинмы, әллә...

**Әйткәндәй...**

**Финалдың ҡыҙғаныс булыуына ҡарамаҫтан, легендалағы сыҫҡандың ҡош булырға теләүе бөтәбеҙҙә лә уға ҡарата ҙур ихтирам уята. Ә әле һөйләнгән осраҡта ҡоштоң сыҫҡан булырға тырышыуы ҡуҙәтелә түгелме?**

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡдисадсы.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК



**Горизонталь буйынса:** 1. Йомро ҡара емеш бирә торған ҡамыш һымаҡ гөл. 4. Йондоҙлоҡ. 7. Йәштең киреһе. 9. Дөйөм эш өсөн халыҡтан йыйылған ярҙам. 10. Бер айғыр йөрөткән көтөү. 11. Аҙнаның бишенсе көнө. 13. Ямғыр яуғанда йылға булып аҡҡан һыу. 15. Инә шоңҡар. 16. Башында әмир торған ил. 17. Ҡунысбау. 19. Эт исеме. 21. Йәһәннәм. 22. Кинофильмдағы бер күренеш. 24. Эҫкертләп, һалам менән ҡаплап ҡуйылған йәшелсә өйөмө. 26. Баҡса гөлө. 28. Алға ҡуйған теләк. 29. Үҫеү барышы. 30. Көньяҡ Уралдағы мәмерйә.

**Вертикаль буйынса:** 1. Сперма. 2. Эткә (...) һый түгел (мәҡәл). 3. Үңәстең өҫкө өлөшө. 5. Төрлө нәмәне киреү өсөн ҡулланылған ҡулайлама. 6. Бер башҡорт ырыуы. 8. Помидор. 10. Ҡыҙҙарҙың кейәүгә сыҡҡанда алып барған кәрәк-яраҡ, түшәк-ҡаралдыһы. 12. Циркта сығыш яһаусы гимнаст. 14. Ир-ат исеме. 17. Тереклектәрҙең ашты ҡабул итеп эшкәртә торған эске ағзаһы. 18. Бөтә яҡтан һыу менән уратылған ҡоро ер. 19. Йылҡының бәкәлен боҙа торған ҡорт. 20. (...)ҡа килһәң, туҫтағыңды йәшермә (мәҡәл). 23. Зәңгәрһыу күк төҫтәге затлы таш. 25. Ярҙамсы һүҙ төркөмө. 27. Йорт-ҡаралтының башы.

**Фәрит РӘМОВ.**

**33-сө һандағы кроссвордтың яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** 6. Алғасҡы. 7. Минор. 8. Быжыр. 9. Шырау. 10. Шамбы. 12. Эйәлек. 15. Хәтирә. 16. Керәкә. 19. Умарта. 22. Бәхти. 23. Ураҙа. 24. Танау. 25. Лүтер. 26. Сәгәҙәт.

**Вертикаль буйынса:** Тамаша. 2. Шаршы. 3. Талаш. 4. Сыбай. 5. Сүрәхә. 11. Батыр. 12. Эңер. 13. Әрәпә. 14. Арпа. 17. Ҡуртым. 18. Тимрәү. 20. Тыуса. 21. Әрмәк. 22. Балта.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ ТУЙ ЙОЛАЛАРЫН...

## рус милләтле йәштәр ҙә үҙ итте

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһында быға тиклем дә өйләнешеүсе йәштәр өсөн никах тантаналары уҙа торғайны. Хәҙер был театрҙың ижади коллективы йәш кәләш менән кейәүгә сәхнәгә сығып, башҡорт туй йолаларында ҡатнашырға, актерҙар менән бергә бәләкәй генә, әммә сағыу тамашала уйнарға мөмкинлек бирә.**



-Театрҙың бинаһында никах теркәү саралары ун йыл тирәһе бара. Элек тә унда һандыҡ һатыу йолаһын индереп ебәргәйнек. Уйланыҡ та, йәштәргә үҙенсәлекле проект тәҡдим итергә булдыҡ. Халҡыбыҙҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре шул тиклем матур һәм ыңғай күренештәргә бай, әйтәйек, киленгә теләк теләү бүләһынымы, бүләктәр биреү булһынмы - быларҙың барыһы менән дә йәштәрҙе таныштырыу мөһим. Икенсенән, ошо тамашала ҡатнашҡан йәштәрҙең күңелендә театрға килгән һайын иң яҡты хәтирәләр ҡабаттан уянып торасаҡ. Шулай уҡ был проект менән театрыбыҙҙың имиджын күтәреү, уның исемен киң йәмәғәтселеккә еткереүҙе лә күҙ уңында тотабыҙ. Йәш ғаиләләрҙең ғүмерендәге иң күркәм ваҡиғаның ошо бинала, ошо артистар менән үтеүе уларҙы беҙҙең яҡын дуҫыбыҙ һәм тоғро тамашасыбыҙ итәсәк, - ти театрҙың директоры Хөрмәтулла Үтәшев.

Башҡорт туй йолаларынан, уйынкөлкөнән, ихлас теләктәрҙән торған был үҙенсәлекле тамашанан уның тәүге ҡатнашыусылары - Юлиә һәм Виталий Еличевтар ҙа ҡәнәғәт ҡалды. "Башҡортостанда йәшәгәс, ундағы төп халыҡтың мәҙәниәтен, йолаларын белмәү яҙыҡ булыр ине. Театрҙағы рухи мөхит, күңелгә ятышлы шарттар, ихлас кешеләр туйыбыҙҙы онотолмаҫлыҡ итеп үткәреү мөмкинлеге бирҙе", - тине йәштәр журналистар менән аралашҡанда.

Заман һәм мода шауҡымына бирелеп, тәүге ғаилә байрамын башҡаларҙыҡынан айырылып торорлоҡ итеп үткәрергә теләүселәр күбәйгәндән-күбәйә барғанда, республикабыҙҙың төп театрының был проекты бик урынлы булды. Нимә генә тимә, ауылдарҙа үткән туйҙарҙа әле йолалар үтәү күпмелер кимәлдә һаҡланып ҡала ла, хәҙер ҡалала башҡорт йәштәренең туйҙары сит ил, сит милләт йолаларын башҡарыуға ҡайтып ҡала башлағайны бит, юғиһә. Һәр хәлдә, артистар тарафынан башҡарылған йолалар, сәхнә костюмдары, музыкаль биҙәлеш, тамашаның ҡыҙыҡлы художестволы формала уйналыуы рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу һәм уны башҡаларға ла танытыу йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӨКӨШӘ ТОРҒАН КӘЗӘГӘ...

## Хоҙай мөгөҙ бирмәгән

Ағыу яһаған ағыуҙан үлер, һөңгө яһаған һөңгөнән үлер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йыш ҡына кешеләр көлөү объектына әйләнермен тип ҡурҡып, изгелек эшләүҙән тыйыла.

**(Сара Бернар).**

Данға ярһып ынтылыуҙан да, ҡурҡып тайпылыуҙан да һаҡлан.

**(Аристотель).**

Үҙ өйөндә бәхетлеләр генә тормошта бәхетле.

**(Лев Толстой).**

Фәкирлек ҡурҡыныс түгел ул. Фәкирлектең яманлығы шунда: уны башҡалар күҙенән йәшереп булмай.

**(Джером).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше бик ҡаты ауырып китә һәм түшәгенән дә тора алмаҫ хәлгә етә. Ул үҙен аяуһыҙ яҙмыш алдында көсһөҙ бер йән эйәһе итеп хис итә башлай. Хәл белешергә килгән бик күп һанлы туғандары, таныштары үҙҙәренең йәлләүе, яҙмышты әрләүе менән уның был тойғоһон тағы ла тәрәнәйтә генә. Бары тик ҡатыны ғына өндәшмәҫ һәм сабыр булып ҡала. Ул ирен йәлләмәй, ә хәленә инә, хәстәрләй, уның күңелен күтәрергә тырыша. Кистәрен усаҡ яғып, иренә аҙағы бәхетле тамамланған ваҡиғалар тураһында һөйләй. Үҙе лә ире алдында матур булырға, ирендә йәшәргә һәм ятрыырға көс тыуҙырырға тырыша. Тик яңғыҙы ҡалған ваҡыттарҙа ғына ул башҡалар иштмәһен өсөн башын тәҙрәгә тығып, йәшертен генә күҙ йәштәрен түгә. Ә уның күҙ йәштәре тамған урында иҫ киткес матур ағас үҫеп сыға.**

**Быуа бер ваҡыт улар йәшәгән ҡалаға үҙенең белеме һәм аҡылы менән танылған бер табип килә. Унан әлеге ауырыу ирҙе ҡарауҙы үтенәләр. Табип ауырыуҙы ҡарай һәм: "Һин һауығаһың һәм аяҡҡа баҫаһың, тик йәлләү шишмәһенән һыу эсеүеңде туктат һәм өй алдында үҫкән ағастың емешен аша", - ти. Ауырыуҙың ҡатыны бөтөн туғандарын, таныштарын өйҙән ҡыуып сығара. Ул иренә тәҙрә төбөндә үҫкән ағастың емешен килтереп бирә. Емеште ашағас, ауырыу ир тәненең яҙылып киткәнен тоя һәм аяғына баҫа.**

**Китер алдынан табип ҡатынға баяғы ағастан тағы бер емеш килтереүен үтенә. Ул был емештең орлоҡтарын сокоп ала һәм уны бөтөн донъяға таратасағын әйтә. Кешеләр был емеште ашап, ысынды - ялғандан, ихласлыкты - ике йөҙлөлөктән, йәлләүҙе хәлгә кереүҙән айырырға өйрәнергә тейеш, ти ул".**

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Августа тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Архангел районы** Аитмәмбәт ауылынан Гөлнур Хәснетдинованы, **Ейәнсура районы** Абзан ауылынан Әбделмән Ишмөхәмәтовты, Иҫәнғол ауылынан Хәмдиә Тләүбирҙинаны, Илфат Әбделғужинды, **Стәрлебаш районы** Айзарәле ауылынан Гөлнур Ҡолоеваны, **Хәйбулла районы** Татырүҙәк ауылынан Илдус Ғирфановты, Ауырғазы районы Моразым ауылынан Фларис Вәлитовты, **Ишембай ҡалаһынан** Миләүшә Ғиниәтуллинаны, Рәмзиә Шәрипованы, **Ғафури районы** Янғыҙҡайын ауылынан Рәйсә Сабитованы, Яугилде ауылынан Лира Ғәлиәхмәтованы, **Бөрйән районы** Байназар ауылынан Фәйрүзә Ғәлинаны, Моразым ауылынан Ғәйшә Әминеваны, **Мәсетле районы** Оло Ыҡтамаҡ ауылынан Наил Ғимашевты, **Туймазы ҡалаһынан** И. Ҡунафинаны, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылынан Гәлиә Садыҡованы, **Мишкә районы** Татарбай ауылынан Лилиә Хизиеваны, **Баймаҡ районы** Йәрмөхәмәт ауылынан Бәлхиә Ишҡыуатованы, **Бөрө ҡалаһынан** Т. Суфиярованы, Илүс Сәйетгәрәевты, Э. Гәләүетдиновани һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡайнар ҡотлайбыҙ! Тормошоғоҙ - йәмле, киләсәгегеҙ - яҡты, барыр юлдарығыҙ - һикәлтәһеҙ, һәр көнөгөҙ ҡояшлы, мөхәббәтле, шатлыҡ-ҡыуанысҡа, изге эштәргә бай булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ХОККЕЙ

# ТУРНИР ЕҢЕҮ МЕНӘН БАШЛАНДЫ

**7 сентябрҙә башланасаҡ Континенталь хоккей лигаһы чемпионаты алдынан командалар, ғәҙәттәгесә, Магнитогорск ҡалаһында - Ромазан, Өфөлә Башҡортостан Президенты кубогы өсөн көс һынаша. Уйындар Магнитогорскийҙа - 24 - 27 августа, ә Өфөлә 1 - 3 сентябрҙә уҙа.**

Юлаевсылар Ромазан кубогы өсөн алыштарҙың тәүгеһендә Мәскәү өлкәһе Чехов ҡалаһының "Витязь" командаһы менән көс һынашты. Тәүге минуттарҙан уҡ юлаевсылар уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды һәм аҙаҡҡаса ысҡындырманы. Матчтың тәүге өс минуты үтеүгә иҫәп Өфө уйынсылары файҙаһына 2:0 булһа, беренсе осор бөтөүгә 7-гә етте. Беренсе осорҙа"Витязь" хоккейсылары тик бер генә шайба менән яуап бирә алды. Икенсе осорҙа Максим Сушинский, Игорь Григоренко һәм Константин Кольцов иҫәпте 10:1 итеүгә өлгәште. Тик осор аҙағына ғына "Витязь" уйынсыһы Сергей Леснухин Эрик Эрсберг ҡапҡаһына тағы бер шайба оҙатты. Өсөнсө осорҙоң тәүге ике минутында "Витязь" хоккейсылары үҙҙәренә тағы ике мәрәй йыйһа, юлаевсы Петр Счастливый иҫәпте 11-гә еткерҙе. Шулай итеп, уйын Өфө командаһы файҙаһына 11:4 иҫәбе менән тамамланды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррират:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 3367